*Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 ОКТЯБРЬ - 1 НОЯБРЬ (ҠАРАСАЙ - ҠЫРПАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№43 (565)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Эльбрус батыр...**

тағы майҙан тотто



4

**Ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам,**

йәки Маңҡа кейәү кәрәкмәй!



6

**Әгәр мин эшләмәһәм...**

быны кем эшләр һуң?



8-9

**Халыҡ араһынан...**

бөртөкләп йыйылған талантттар бит улар



11

14 **ТВ-программа**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәйҙә мигранттар мәсьәләһе киҫкенләшә барып, Бирюлево бәрелеше рәүешенә килеп етте. Беҙҙә лә бит сит-яттарҙан аяҡ баҫыр урын ҡалманы. Мигранттар хеҙмәтенә мохтажмы республикабыҙ? Һәм, ғөмүмән, был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нindәй?

***Тамара ТАЙЫПОВА, БР буйынса Рәсәй федераль миграция хеҙмәте идаралығының бүлек начальнигы урынбаҫары:*** Урындағы граждандар менән айырым мигранттар араһында даими конфликттар булып тороуға һәм, ниһайәт, бөтә илде шаулатҡан Бирюлево ҡасабаһындағы урам бәрелештәренә ҡарамаҫтан, Башҡортостанда, Аллаға шөкөр, ундай хәлдәргә барып еткәнебеҙ юҡ. Илебеҙҙәге кеүек үк, республикабыҙҙа ла мигранттарҙың күп булыуына ҡарамаҫтан, беҙҙә хәлдәр сағыштырмаса тыныс, тип әйтер инем. Был йәһәттән күп нәмә, әлбиттә, урындағы халыҡтың иплелегенә, иманлығына, сабырлығына, йәғни хәҙергесә әйткәндә, толерантлығына бәйлелер, тип уйлайым. Беҙҙәге күпселек халыҡтың мосолман булыуы, шулай уҡ республикабыҙға ситтән килгән мигранттарҙың да күпселеге (60 проценты) - Үзбәкстан, Әзербайжан, Төркиә һәм башҡа шуның кеүек мосолман илдәренән булыуы халыҡтарға аңлашып, һыйышып йәшәү өсөн шарттар тыуҙыралыр тигән фекерҙәмен. Шулай ҙа айырым граждандарҙан йыш ҡына мигранттар һанын сикләү, урындағы халыҡҡа эш урындарын бушатыу кәрәклеге тураһында мөрәжәғәттәр иштергә тура килә, тик был мәсьәлә беҙҙең адресҡа ҡарата түгел. Миграция мәсьәләләре республикабыҙ Хөкүмәте кимәлендә көйләнә. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына Миграция сәйәсәте буйынса Башҡортостан Республикаһы ҡарамағындағы ведомость-ара комиссия ултырышы булып үтте. Бөтә мәсьәләләр тап шунда ҡарала ла инде. Әлеге ултырышта ошо йылға раҫланған сит ил эшсе көстәрен йәлеп итеү һәм файҙаланыуға квота күләмен корректировкалау мәсьәләһе тикшерелде. Ә квоталар, билдәле булыуынса, эш бирeүселәрҙең күпме кеше һәм ниндәй һөнәр эйәләренә мохтаж булыуынан, йәғни улар биргән вакансияларҙан сығып төҙөлә. Хеҙмәт баҙарындағы хәлгә ентекле анализ яһала, эш биреүселәрҙән теге йәки был вакансияға урындағы граждандар иҫәбенән һорау булыу-булмауы тикшерелә һ.б. Квоталарға төҙәтмәләр индереү буйынса эштә төрлө министрлыҡтар һәм ведомстволар ҡатнаша: иң беренсе - БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау, Төҙөлөш, Мәғариф министрлыҡтары, беҙҙең идаралыҡ, Хеҙмәт инспекцияһы һәм башҡалар... Шунан һуң ғына квота рөхсәт алыу өсөн республика Президентына индерелә. Мигранттар күберәк төҙөлөштә һәм ауыл хужалығы секторҙарында, атап әйткәндә, йәшелсәселектә, мәшғүл. Ләкин улар сауҙа өлкәһендә лә күп, тиерһегеҙ. Рөхсәт ителгән квотанан тыш, республикаға ваҡытлыса йәшәү маҡсаты менән (3-5 йылға) килеүселәр ҙә бар бит әле. Уларға ниндәйҙер хеҙмәт төрө менән шөғөлләнеү тыйылмай - сауҙала нигеҙҙә ана шундайҙар эшләй. Эйе, беҙҙең ир-егеттәр хәҙер ғаиләһен аҫырау өсөн Алыҫ Төньяҡта, Себерҙә аҡса табырға мәжбүр, ләкин был үҙебеҙҙә эш юҡлыҡтан түгел, тип әйтмәксемен. Эш биреүселәр раҫлауынса, үҙебеҙҙекеләр йә эшләргә теләмәй (дөрөҫөрәге, түбән эш хаҡына), йә эшләһә лә алған аҡсаһын эсеп бөтә лә эшкә сыҡмай ҙа ҡуя. Ә ситтән килеүселәр өсөн 5 мең дә, 7 мең дә, 10 мең дә күп аҡса, улар шуға (ҡайһы саҡ хатта тамаҡ ялына ла) риза булып, өнһөҙ-тынһыҙ ғына эшләүҙәрен беләә. Әйткәндәй, квота күләме йыл һайын бер кимәлдәрәк (25-30 мең кеше) һаҡлана, шунан артҡаны юҡ та. Әле бына киләһе йылға ул 27 мең булып килде. Беҙҙә хоҡуҡ тәртибен боҙоусы мигранттарға Мәскәүҙәге шикелле палатка лагеры булдырыуҙың кәрәге юҡ, ә шулай ҙа миграция законын боҙоусылар осрап тора. Улар нигеҙҙә республикабыҙҙа булыу ваҡытын оҙайтыу маҡсатында документтарына ялған төҙәтеүҙәр индереүҙә ғәйепләнә. Быйыл төрлө сәбәптәр менән хоҡуҡ тәртибен боҙоусы 360 кеше (былтыр 345) республиканан ҡыуылды. Беҙҙең идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында быйыл "Нелегал-2013" оператив-профилактик сара үткәрелде. Һөҙөмтәлә байтаҡ хоҡуҡ боҙоу осраҡтары асыҡланды һәм 1 млн. 975 мең һумлыҡ штраф түләтелде, 1 млн. 092 мең һум аҡса ҡайтарып алынды. Мигранттарға бәйле Мәскәү тирәһендә барған хәлдәр илдең миграция сәйәсәтенә ҡайһы бер үҙгәрештәр индереү ихтималы бар, әлбиттә, ләкин уныһын киләсәк күрһәтер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## МИРАҪ

*Тыуғанымдан киткәнемә тиклем -*
*Ғүмер буйы йыйған милкемде,*
*Балалаларым, һеҙгә ҡалдырамын*
*Иң ҙур мираҫ - туған телемдә.*

*Ул бит миңә әсәй-атайымдың*
*Иң берҙән-бер ғәзиз мираҫы.*
*Ул да һеҙгә ғүмер буйы ерҙә*
*Һулар һауа кеүек булһасы.*

*Мең йыл буйы халыҡ аҡылының*
*Мең тылсымын йыйған хазина,*
*Юҡ, һатылмай, сөнки мөмкин түгел*
*Баһа ҡуйыу уның хаҡына.*

*Күкрәк һөтө, бишек йыры менән*
*Ингән дә ул йәнде имләгән.*
*Юҡҡамы ни кеше туған телен*
*Тыуған иле менән тиңләгән.*

*Туған-дуҫҡа бал-май булып тамған,*
*Дошмандарға - уҡтай ҡаҙалған.*
*Сөнки ул бит ер, мөхәббәт, яу, нәфрәт*
*Һут-утында ҡайнап яралған.*

*Туған телдә күпме сәсән, шағир*
*Йырға һалған яҡты өмөтөн.*
*Милләтенең атыр таңы өсөн*
*Ҡаны менән яҙған хаҡ һүҙен.*

*Халҡым барҙа туған телем булыр,*
*Тик һеҙ уға ғәмһеҙ булмағыҙ.*
*Ин ҙур яҙыҡ, гонаһ - үҙегеҙҙе*
*Аманаттан өҫтөн ҡуйһағыҙ.*

*Киң донъянан бер саҡ китеп барғас,*
*Тар ҡәберҙә уйҙа ятырмын.*
*Ейәндәрем туған телен белһә,*
*Һөйләшергә кире ҡайтырмын.*

*Олатайҙан, әсәйемдән ҡалған*
*Ғүмер буйы йыйған милкемде,*
*Балаларым, һеҙгә ҡалдырамын*
*Бөйөк мираҫ - туған телемде!*

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЮЛ КҮРҺӘТӘ...

## аҙашмаһындар, тип

**"Киске Өфө" гәзите донъя күрә башлағас, уны бығаса тиклем сығып килгән башҡорт телле баҫмаларға конкурент булып, уларҙың уҡыусыһын үҙенә тартып алыр, тигән хәүеф тә тыуа бирeп ҡуйғайны күңелдә. Әммә һәр кешенең зауығы, талымы төрлө булған кеүек, уның мәғлүмәт даирәһендәге ихтыяжы ла төрлө икән.**

Кемгәлер еңел-елпе мәғлүмәт кәрәк булһа, бәғзеләр дин, иман тураһында күберәк белергә тырыша. Уҡытыусылар иһә, белгәнемә өҫтәп, балаларға тағы ла ниндәй яңылыҡ табырмын, тигән өмөттән ваҡытлы матбуғат биттәрен аҡтара. Ғүмере буйы күңел түрендә иң изге хыялдарын-маҡсаттарын йөрөтөп тә, уны тормошҡа ашырырға дәрт-дарманы етмәүселәр, минең кеүек берәйһе бармы икән был донъяла, ул нимә эшләне икән, тип, үҙ яҙмышына оҡшаған тарих, эҙләй һ.б.

Әлбиттә, бындай мәҡәләләр башҡорт милли матбуғатының һәр ҡайһыһында осрай, әммә "Киске Өфө"лә улар үҙенә күрә бер даимилыҡ, бер концепцияға ярашлы алып барыла. "Көн ҡаҙағы", "Фекер төйөнө", "Көнитмеш", "Тарихнамә", "Фани донъя", "Башҡорт ҡамусы", "Зыялылар майҙаны", "Йәшәйеш ҡағиҙәһе", "Уңыш ҡаҙан" биттәрендә донъя күргән мәҡәләләр, ысынлап та, халҡыбыҙ күңеленә рух һалып, баҙлап ятҡан осҡондо ҡабыҙырҙай.

Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзитен мин, ысынлап та, баш ҡаланың киске мәле менән сағыштырыр инем. Көн эңер менән алмашынған мәлдә, ҡапыл күҙҙәрҙе ҡамаштырып, ҡайһы йүнәлештә барырға белмәй аптырап ҡалған юлсының барыр юлын мендәрсә уттары менән балҡытҡан Өфө урамдары кеүек, был баҫма ла тормоштоң күҙгә төртһәң күренмәҫ ҡараңғылығына инеп барғанда ҡапыл балҡып янған ут кеүек - ҡайһы яҡҡа барһам, туңырмын, ҡайһы тарафтарҙа уңырмын, тип икеләнгәндә, тура, дөрөҫ юл күрһәтә. Күрһәтеп кенә ҡалмай, мең төстәрҙә балҡыған уттары менән һине тәғәйен урыныңа тиклем оҙатып ҡуя. Шуға ла ижад усағында ла, юл саттарында ла утың һис һүнмәһен, "Киске Өфө", тием.

**Сөмбөл АЙТУҒАНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Рәсәйҙә мигранттар мәсьәләһе киҫкенләшә барып, Бирюлево бәрелеше рәүешенә килеп етте. Беҙҙә лә бит сит-яттарҙан аяҡ баҫыр урын ҡалманы. Мигранттар хеҙмәтенә мохтажмы республикабыҙ? Һәм, ғөмүмән, был мәсьәләгә ҡарашығыҙ ниндәй?

**(Башы 1-се биттә).**

***Айһылыу ЮНЫСОВА, тарих фәндәре докторы, профессор, РФА Өфө ғилми үҙәгенең Этнологик тикшеренеүҙәр институты директоры:*** Һуңғы 20 йыл эсендәге осорҙо ғына алып ҡараһаҡ та, миграция мәсьәләләренең йоғонтоһо хаҡында һөйләгәндә, Башҡортостандағы хәлде мин тоторокло тип атар инем. Был йылдар эсендә республикабыҙға килеп төпләнгән сит халыҡтар Башҡортостан граждандарына әүерелде һәм әлеге ваҡытта улар республикалағы дөйөм халыҡ һанының 11 процентын тәшкил итә. Беҙҙәге шарттарға уңышлы яраҡлашып, улар беҙҙең яныбыҙҙа даими рәүештә йәшәүҙәрен һәм эшләүҙәрен дауам итә. Былар үткән быуатта революциянан һуң кулак мөһөрө тағылып, Себергә һөрөлөүҙән, шулай уҡ репрессия эҙәрлекләүҙәренән ҡасып, Урта Азияға сығып киткән башҡорт һәм татарҙарҙың тарихи тыуған иленә әйләнеп ҡайтыуы булһа, ваҡытлыса эшкә килеүсе мигранттар хәрәкәте бының менән тукталып ҡалманы, киреһенсә, бығаса күрелмәгән темптарҙа үҫешә башланы.Үкенескә күрә, улар һан яғынан ғына түгел, сифат яғынан да үҙгәрҙе, нигеҙҙә квалификацияһы булмаған ҡара эш башҡарыусылар - урам һепереүсе, ташсы, шофер һәм башҡа шундай эшселәр иҫәбенә тулыланды. Бер яҡтан, республика халҡы өсөн мигрант хеҙмәтенең отошло яғы ла бар: арзан хаҡҡа фатир ремонтлайҙар, башҡа төр ҡара эш башҡаралар. Икенсе яҡтан, миграцияның кире эҙемтәләре шунан ғибәрәт: улар сифатһыҙ тауар һәм аҙыҡ-түлек менән сауҙа итә(респонденттарҙың 41 проценты фекеренсә), урындағы халыҡтың эш урындарын ала (34 процент), түбән хаҡҡа эшләргә ризалашып, хеҙмәт хаҡы кимәлен төшөрөүгә сәбәпсе була (32 процент), улар арҡаһында торлаҡҡа хаҡ арта (23 процент), енәйәтселек арта (21 процент), бысраҡ һәм сир таралыуға сәбәпсе булып торалар (18 процент) һ.б. Миграция - күп яҡлы күренеш ул. Билдәләп кителеүенсә, бер яҡлап, ул Башҡортостандың этник картаһын байытыуға өлөш индерә. Күп милләтле Башҡортостан үткән быуат аҙаҡтары - яңы быуат баштарында төркмән, үзбәк, ҡырғыҙ, әзербайжан, тажик, әрмән милли-мәҙәни үҙәктәре менән тулыланды, дөйөм мәҙәниәтебеҙ уларҙың үҙенсәлекле этник йола-традициялары иҫәбенә төрләндерелде, байытылды. Шул уҡ ваҡытта урындағы халыҡтан һорау алыуҙарҙан асыҡланыуынса, иң күп процент йыйыусы кире күрһәткес дөйөм психологик көсөргәнеш, бик ҙур транспорт һәм халыҡ ағымына бәйле негатив хис-тойғолар менән характерлана.

***Урал ХӨРМӘТУЛЛИН, эшсе:*** Миңә ҡалһа, үҙен генә ҡайғыртып йәшәгән тар ҡарашлы обыватель рәүешендә, "Миңә теймәһәләр, булды" тип тыныс ҡына йәшәп ят та бит, юҡ, булмай! Тамам теңкәне ҡоротто был мигранттар, республикабыҙға ғына түгел, мөҙөгөҙһөҙ һыйыр кеүек, хатта ки йәшәп ятҡан йортобоҙға бәреп килеп инә башланылар бит. Үткән йәй беҙҙең подъезда өс бүлмәле бер фатирҙы һатып алып, әллә үзбәк, әллә төркмән ғаиләһе (кәмендә 15-20 кеше) йәшәй башланы. Былай ҙа тығыҙ йорт алды майҙанына уларҙың бер йөк машинаһы, ике "Газель" микроавтобусы, ике еңел машиналары ла килеп ҡунаҡланы. Улары өс-дүрт көн юғалып тора ла яңынан килеп тора - күрәһең, ҡайҙандыр йөк ташып, шуны һатыу менән шөғөлдәр. Ирҙәре көн-төн эшләй, ҡатындары, бала-сағалары өйҙә. Ҡыҫҡаһы, тыныс ҡына йәшәп ятҡан подъезыбыҙҙа шау-шыу, ҡиәмәт ҡупты: фатирҙарына ҙур габаритлы йөк ташып, лифтты эштән сығарҙылар, подъезд ишегенең кодлы йоҙағы ла ватылды - хәҙер кем теләй, шул инеп йөрөй, үҙҙәренә өйөрҙәре менән ватандаштары килеп тула. Эсеүен эсмәһәләр ҙә, иҫеректәр һымаҡ ҡыланалар, ҡысҡырышып һөйләшәләр - үҙҙәрен бик иркен тоталар. Кем беләһе, бәлки, билдәле матдәләр йоғонтоһона ла бирелеп алаларҙыр. Полицияның килеп күренгәне лә юҡ, йорттағы үҙебеҙҙең халыҡ иһә, ҡасып-боҫоп тигәндәй, шым ғына йөрөп ятабыҙ, улар ни ҡыланһа ла түҙәбеҙ, өндәшмәйбеҙ. Беҙҙән арыраҡ, баҙарға яҡын урамда, ошо халыҡ бер-ике йортто тотош тигәндәй һатып алғандар, тип ишеттем. Мигрант тигән был әрһеҙ, тупһыҙ халыҡ әкренләп кенә беҙҙең баҙарҙы баҫып алды, хәҙер инде хеҙмәт, торлаҡ баҙарына ҡул һуҙа. Тиҙҙән иҡтисад, финанс өлкәләре лә уларға бәйлелектә тороп ҡалмағайы... Ошо мәғлүмәттәргә күҙ һалғанда ғына ла сәстәр үрә тора бит: "2013 йылдың өс айында ғына ла гастарбайтерҙар Рәсәйҙән үҙ илдәрендә йәшәүсе ғаиләләренә 1 миллиард АҠШ доллары күсергән, йәғни был Үзбәкстандың эске тулайым продукцияһының 25 процентын тәшкил итә, тигән һүҙ!" (АИФ, № 31, 2013 йыл). Үҙәк матбуғатта, телевидение тапшырыуҙарында Рәсәйҙең дөрөҫ булмаған миграция сәйәсәтен тәнҡитләүсе гәҙел, төплө сығыштар бик йыш яңғыраһа ла, мигранттар арҡаһында халҡыбыҙ әленән-әле аяныслы фажиғәләргә тарып торһа ла, ил етәкселеге был йәһәттән сикләү саралары күрергә ашыҡмай...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**

Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ -**"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** һәм 10 уҡыусыбыҙ Гөлфиә Янбаеваның **"Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** тигән китаптарына лайыҡ буласаҡ.



**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә РФ Үҙәк банкының һәм Беларусь Республикаһы Милли банкының 39-сы Банк-ара валюта советы үтә. Башҡортостанға был банктар етәкселәре Эльвира Нәбиуллина һәм Надежда Ермаковалар етәкселегендәге рәсми делегациялар килде. Уларҙы "Өфө" аэропортында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡаршы алды.

✓Республика йортонда Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова күп балалы әсәләргә "Әсәлек даны" миҙалдары тапшырҙы. Был юлы биш бала тәрбиәләүсе 59 әсә миҙалға лайыҡ булды. Вице-премьер билдәләүенсә, 2012 йылда ғаиләләргә ярҙам итеү өсөн 3,2 миллиард һум аҡса бүленгән, быйыл да был һан кәмемәгән. Республикала аҡсалата ярҙамдың яңы төрҙәре булдырылды. Һәр өсөнсө һәм унан һуңғы балаға ай һайын өс мең һум аҡса түләнә. Күп балалы ғаиләләр торлаҡ сертификаттары ала: 400 миллион һумға 170 документ бирелгән.

✓РФ Дәүләт Думаһы Рәсәй Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының минималь эш хаҡы кимәлен күтәреүгә йүнәлтелгән закон проектын беренсе уҡыуҙа хупланы. Документ 2014 йылдың 1 ғинуарынан минималь эш хаҡы күләмен 6,7 процентҡа йәки айына 5554 һумға тиклем арттырыуҙы ҡарай. Әле минималь эш хаҡы күләме айына 5205 һум тәшкил итә. 2013 йылда эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы күләме (айына 7911 һум) менән уның нисбәте, яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 65,8 процент тәшкил итәсәк.

✓БР Мәғариф министрлығы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы Плешанов ауылында өлкәнең башҡорт коллективтары етәкселәре һәм үҙешмәкәр ижадсылары өсөн семинар ойошторҙо. Башҡортостандан саҡырылған оҫталар төрлө темаларға оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Өс көнгә һуҙылған семинар Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған башҡорт мәҙәниәте байрамы менән тамамланды. Уның сиктәрендә "Йәшлек шоу" үтте, унда Башҡортостандан һәм Ырымбур өлкәһенән йәш башҡарыусылар ҡатнашты.

✓Өфөлә "Рәсәйҙә ислам һәм дәүләт" Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция булып үтте. Сара Ырымбур Мосолмандар диниә йыйылышы - Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының 225 йыллығы сиктәрендә уҙа. Башҡортостанға тантанаға ғәрәп илдәренән күренекле мосолман дине эшмәкәрҙәре, Рәсәй дини идаралыҡтары һәм сит ил дини уҡыу йорттары вәкилдәре килде.

✔ Ир балаларҙың байтағы тыуғандан һуң мәрхүм булып, уларҙың һаны нескә заттан күпкә кәмеп китә икән. Ғалимдар был хәлдә яңы тыуған ир сабыйҙарға йылылыҡтың, дөрөҫөрәге, ҡояш нурының етмәүе менән аңлата.



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЯҠТЫЛЫҠ ҠАЙҘАН СЫҒА...

## ҡеүәт тә шунда

**"Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда". Был әйтем туранан-тура мәғәнәһендә ҡояш нурына бәйле. Һүҙебеҙҙе үҫентеләрҙән башлайыҡ. Ҡыш теплицаларҙа үҫтерелгән йәшелсәне, емеш-еләкте ауыҙ иткәнегеҙ бармы? Булһа, йәйге асыҡ һауала тәбиғи шарттарҙа үҫтерелгәндәренән улар ни яғы менән айырыла, тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, йәйге асыҡ һауала үҫкән йәшелсә, емеш-еләк тәүгеләренән татлы һәм туҡлыҡлы булыуы менән айырылғанын һәр кем билдәләй алыр. Теплицала үҫтерелгән йәшелсә-емештән, асылда, һыу тәме килә. Хикмәт нимәлә икән? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Шундай тәжрибә үткәреп ҡарайыҡ. Теплицала үҫтерелгән йәшелсә-емеште ваҡ өлөштәргә турап, сөм тәрилкәгә һалып, һыуытҡысҡа ҡуйып тундырғандан һуң киренән йылыға сығарып иретһәк, нимә күрәбеҙ? Эйе, масса ирегәндән һуң тәрилкә төбөндә һыу хасил буласаҡ. Йәғни, был саҡта беҙ йәшелсә-емештең бер өлөшән һыу тәшкил иткәненә инанабыҙ. Тик был миҫалды теплицала йәшелсә-емеш үҫтереүгә антиреклама итеп ҡабул итә күрмәгеҙ берүк. Был йәһәттән йыл әйләнәһенә йылы яҡтарҙағы йәйҙәрҙә йәшәүселәргә генә рәхәт ул. Улар йыл әйләнәһенә ҡояш нурында бешкән йәшелсә-емеш менән рәхәтләнеп туҡлана. Беҙ иһә, уларҙы теплицаларҙа ғына үҫтерергә мәжбүрбеҙ. Теплицаларҙа иһә, яһалма ҡояш. Мин быңдай сағыштырыуҙы бары тик ҡояш нурын башҡа бер ниндәй энергия менән дә алыштырыу мөмкин булмағанын аңлатыр өсөн генә килтерәм.

"Беҙ ҡояш ашайбыҙ" тигән төшөнсә бында һәр йәһәттән урынлы, сөнки беҙ ҡояш нурына һуғарылып үҫкән ризыҡ менән туҡланған саҡта, ысынлап та, ҡояшты ашайбыҙ булып сыға. Ай-һай, бигерәк тә тәмле икән ҡояш тигәндәре. Улай ғына ла түгел, донъялағы иң тәмле, иң туҡлыҡлы ризыҡ та шул ҡояш икән. Ҡояш булмаһа, ризыҡтың таты ғына түгел, йәшәүҙең үҙе лә булмаҫ ине бит. Бөтөн тереклек Яралтыусы тарафынан нурҙан бар ителгәнен дә ошо рәүешле аңлайбыҙ.

"Ҡымыҙҙың көсө ҡылғанда" тигән аңлауҙың да асылы шул уҡ ҡояшҡа бәйле бит. Ни өсөн тигәндә, даланың күп йыллыҡ үләне һаналған ҡылған йәйен-көҙөн-ҡышын-яҙын һәр ваҡыт ҡояш нуры аҫтында тирбәлә. Һәр саҡ ҡояш аҫтында булғанға күрә лә, уның ғүмере лә оҙон. Әйткәндәй, далала ҡымыҙ ғына түгел, һөт тә, ит тә, икмәк тә татлы. Американлылар доллар биреп беҙҙән һатып алған ҡаты бойҙай ҙа, йылҡы ите лә, бал да республикабыҙҙың тик Урал аръяғында (дөрөҫөрәге, Урал алдында, сөнки ҡояш иң тәүҙә унда сыға. Ҡибла урынынан тороп ҡарағанда, Өфө, Ҡаҙан, Мәскәү - Урал аръяғында - **Ә.Ғ.-Ү.**) үҫтерелә һәм етештерелә. Донъя кимәлендә әллә нисәмә тапҡыр иң яҡшыны тип табылып, алтын миҙалдар яулаған башҡорт балының төп үҙенсәлеге лә шул уҡ ҡояш нурына бәйле. Сөнки бал ҡорто нектар йыйған үләндәрҙең, сәскәләрҙең, ағастарҙың күп төрлөлөгөнә бәйле башҡорт балы феномены. Әүндай үләндәр, ундай сәскәләр, ундай ағастар үҫкән ергә ҡояштың айырата һөйөү менән йылмайып ҡарағанын бында аңлауы ҡыйын түгел. Әйткәндәй, меңәр йылдар һуҙымында Уралтауын сит-яттарға бирмәгән халыҡтың ҡеүәте лә Хоҙай ҡөҙрәтенән вә ҡояштандыр, тим.

Ҡояш нурының, яҡтылыҡтың бар тереклеккә, атап әйткәндә, үҫемлектәр, хайуандар донъяһына, кешелеккә нисек йоғонто яһауы хаҡында бик күпте һөйләргә мөмкин булыр ине. Америка ғалимдары, мәҫәлән, яңы тыуған сабыйҙарҙың енесе ҡояш нуры әүҙемлегенә бәйле булыуын иҫбатлаған. Әйтәйек, көнбайышта малайҙар күберәк тыуа икән, ә ҡояш нуры күберәгеен нескә затты яралта, йәғни ҡояшҡа яҡынайған һайын ҡыҙҙар күберәк донъяға килә. Ғалимдар донъяның 202 илендә 1997 йылдан алып 2006 йылға тиклем сабыйҙарҙың донъяға килеү статистикаһын да тикшереп ҡараған. Улар яңы тыуған ир сабыйҙарҙы донъяға килгән географик урындарына, көн оҙайлығына һәм яңы тыуған ҡыҙ сабыйҙарға бәйле пропорцияла тикшереп, бик ҡыҙыҡлы һығымталарға килгән. Беҙ быуаса донъяла ҡыҙ балалар ир балаларға ҡарағанда күберәк тыуа, тип иҫәпләп килә инек. Баҡтиһән, донъяға тыуған балаларҙың һаны буйынса ир балалар күберәкте тәшкил итә икән дә. Нисбәт: 105-100. Бәй, улай булғас, донъяла көслө зат һан яғынан нескә заттан күберәк булырға тейеш түгелме һуң? Баҡтиһән, ир балаларҙың байтағы тыуғандан һуң мәрхүм булып, уларҙың һаны нескә заттан күпкә кәмеп китә икән. Ғалимдар был хәлдә яңы тыуған ир сабыйҙарға йылылыҡтың, дөрөҫөрәге, ҡояш нурының етмәүе менән аңлата. Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда шул.

Донъяла "Европаға яҡынлашҡан һайын, яңы тыуған сабыйҙарҙың һаны кәмей бара", тигән фекер күптән нығынған инде. Был фекерҙе яҡлаусылар Европала балаларҙың аҙыраҡ тыуыуын был илдәрҙә һәм дәүләттәрҙә йәшәү кимәленең юғары кимәлгә күтәрелеүенә, комфорттың беренсе урынға сығыуына бәйләй. Һуңғы 25 йыл эсендә бер өлөшө Европаға йәки тулайым Европаға, тағы ла бер нисә Америка ҡитғаһына ҡараған илдәрҙә 1984 йылдан 2009 йылға тиклем тыуымдың бик ныҡ кәмеүе күҙәтелә. Миҫалға Бразилияны, Мексиканы һәм Төркиәне алырға була. Әгәр ҙә 1984 йылда 100 төрөк әсәһенең 390 балаһы булһа, 2012 йылда инде 212 балаға тиклем кәмегән. Күҙаллауҙар буйынса, 2038 йылда Төркиәнең халҡы бик күпкә кәмейәсәк. Төркиәлә халыҡ һанының кәмеүен глобалләшеү, урбанизация, белем кимәленең күтәрелеүе, ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттә социаль роле үҙгәреүе менән бәйләйҙәр. Өҫтәүенә, төрөктәрҙең иң ҙур өлөшө бөгөн кредитҡа алынған ҡыҫыҡ фатирҙарҙа, панель йорттарҙа көн күрә. Балаларҙың аҙ тыуыуын илдәге һәм донъялағы иҡтисад көрсөгө менән дә бәйләйҙәр. Сабыйҙарҙың үлем осрағы буйынса ла Төркиә донъяла тәүге урындарҙың береһен биләй, йәғни уларҙа донъяға килгән 1000 сабыйҙың 17-һе яҡты донъя менән хушлаша. Был күрһәткес донъя буйынса 4,6 баланы тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта Төркиәнең Европа өлөшөнән Азияға табан барған һайын, йәғни ҡояшҡа яҡынлашҡан һайын, балаларҙың һаны ла арта бара. 1998 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, илдең көнбайышында йәшәүсе төрөк әсәһенә иң күбендә ике генә, ә көнсығыштағы курд әсәһенә 4,2 бала тура килә. Ҡайһы бер ғалимдар был хәлдә ике милләттең, йәғни төрөктәр менән курдтарҙың менталитет, ғөрөф-ғәҙәт айырымлығына бәйләп аңлатырға тырышып ҡараған, әммә көнбайышта йәшәүсе курдтарҙың да ғаиләһендә ике бала булыуы уларҙы был аңлатманан баш тартырға мәжбүр иткән. Нимә генә тимәйек, бар хикмәт Ҡояш апайҙа, дөрөҫөрәге, Ҡояш әсәйҙә икән. Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда шул.

Төрөктәрҙең үҙҙәрендә сабыйҙар әҙерәк тыуыуын донъяның глобаль, илдең социаль шарттарына бәйләп аңлатырға тырышыуҙарҙы ла аңларға булалыр. Йәшәйештең үҙгәрешеҙ ҡануны буйынса, киреһенсә, ни тиклем йәшәү кимәле түбәнәйһә, тап шул ваҡытта сабыйҙар күберәк тыуа. Миҫалға Африкалағы, Ҡытайҙағы, Һиндостандағы "Бэбибум"дарҙы алайыҡ. Һиндостанда, мәҫәлән, 40 процент кеше аслыҡ хәлендә йәшәй, Африкала тағы ла хөртөрәк. Ә балалар тыуыуына килгәндә, алдағы йылдарҙа Һиндостан Ҡытайҙы уҙып, беренсе урынға сығасаҡ, ә Африка халҡы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 1 миллиардҡа барып етте.

Мин бында ҡояштың кеше тыуыуына ни рәүешле тәьҫир итеүен тикшерергә теләмәйем. Шулай ҙа үҙебеҙҙең тормоштан бәләкәй генә бер миҫал килтереп үткем килә. Һуңғы бер нисә айҙа Андрей Малахов үҙенең "Һөйләһендәр әйҙә" ("Пусть говорят") программаһында Лена Кострикинаның кемдән бала табыуы мәсьәләһен тикшерә. Тапшырыу геройы Ленаның ире Михаил ҡатынының баланы икенсе ирҙән уйнаштан табыуы хаҡында белдереп, ДНК анализын бер нисә тапшырыуҙа ҡабат-ҡабат яһаттырҙы. Лена менән бәйләнештә булған йәп-йәш ир-егеттәр анализдарын тапшырҙы, әммә уларҙың береһенең дә баланың атаһы түгеллеге асыҡланғас, 42 йәшлек тажик кешеһе Сәйет Шәриповтың да ДНК анализын алдылар. Һөҙөмтәлә башҡа анализ тапшырыусы ир-егеттәрҙән ике мәртәбәләй өлкән Сәйет баланың атаһы булып сыҡты.

Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда шул.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Федерация Советы сенаторҙары бюллетендәргә "Барыһына ла ҡаршы" графаһын ҡайтарыуҙы күҙ уңында тотоусы закон проектын Дәүләт Думаһы депутаттары ҡарауына индерҙе. "Барыһына ла ҡаршы" графаһы федераль закон менән 2006 йылда туктатылғайны. Бынан алда парламенттың юғары палатаһы спикеры Валентина Матвиенко, ҡануниәтҡә быңдай үҙгәрештәр индереүҙе хәҙерге сәйәси шарттар талап итә, улар һайлау процесын мөмкин тиклем гәҙелерәк яһаясаҡ, ә һайлаусыларға, һайлауҙарҙың нисек булыуына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең конституцион хоҡуғын һәм үҙ ихтыярын белдерергә мөмкинлек бирәсәк, тигәйне.

✔Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тарафынан әҙерләнгән "Өсөнсө быуын халыҡ университеты" республика маҡсатлы программаһы "Өлкән быуын кешеләре өсөн мәғлүмәти технологиялар" Бөтә Рәсәй төбәк белем биреү программалары конкурсының "Уҡытыуҙы иң яҡшы ойоштороу" номинацияһында еңеүсе тип танылды. 2011 йылда төрлө йүнәлеш буйынса уҡытыуҙарҙа 16 мең өлкән йәштәге граждан ҡатнашҡан; 2012 йылда - 18,3 мең, ә 2013 йылдың биш айы эсендә ете меңләп пенсионер уҡыған.

✔Өфөнөң халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге Өфө ҡала бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм яҡлау фонды менән берлектә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса йыл башынан алып дүртенсе бушлай курс-консультациялар ойоштора. Дәрестәр 11 ноябрҙән 22-һенә тиклем үтәсәк. 2013 йыл башынан алып эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса бушлай курстарҙа 140 тыңлаусы ҡатнашҡан. Курстар барышында 280-дән ашыу кеше үҙ эшен ойоштороу буйынса консультациялар алған.

✔26 октябрҙә БР Милли музейында "Мираҫ" хәйриә фонды инициативаһы менән "Борон-борон заманда..." күргәҙмәһе сиктәрендә бер нисә төр автор курсаҡтары һәм уйынсыҡтары эшләү буйынса интерактив оҫталыҡ-шоуы үтәсәк. Атап әйткәндә, сарала ҡатнашыусылар кейеҙҙән, балсыҡтан текстильшарнирлы ҡурсаҡтар эшләү дәресендә ҡатнаша аласаҡ. Оҫталыҡ-шоуын "Борон-борон заманда..." күргәҙмәһендә ҡатнашыусы Өфөнөң дүрт ҡурсаҡ эшләүсеһе һәм керамика оҫтаһы үткәрәсәк. Оҫталыҡ-шоу 26 октябрҙә 14 сәғәт 30 минутта башланасаҡ.

**“Башинформ”дан.**

КӨНҮҘӘК ВАҠИҒА

# РӘСӘЙ ПРЕЗИДЕНТЫНЫҢ...
## кәңәш ҡорғаны

**Билдәле булыуынса, 22 октябрҙә Волга буйы федераль округына эш сәфәре барышында Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанда ла булып китте.**

Өфөлә ил башлығы милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса РФ Президенты ҡарамағындағы Совет ултырышын үткәрҙе, уның көн тәртибенә Рәсәй Федерацияһы субъекттарында дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре индерелгәйне. Ултырышты асып, В.Путин, дәүләт милли сәйәсәтенең яңы Стратегияһы үтәлешен тәьмин итеүҙә бөгөн айырыуса урындарҙа, төбәк һәм муниципаль властарҙан йөкмәткеле әүҙем эш талап ителеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шул уҡ ваҡытта ул был йәһәттән эштең һүлпән барыуы, федераль Стратегияны тормошҡа ашырыу буйынса эш пландарының да хатта Рәсәй Федерацияһының ни бары тугыҙ төбәгендә генә төҙөлөүен, ә инде аныҡ эштәргә килгәндә, гөмүмән, тағы ла күңелһеҙерәк күренештәр ихтималлыгын билдәләне.

"Беҙҙә - федератив дәүләт", тип, айырым асыҡ әйтеп китте В.Путин һәм, тәбиғи, төбәктәргә урындағы үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, ошо йүнәлештәге план һәм эш документтарының федераль Стратегияны тулыландырыу маҡсатында төҙөләргә тейешлегенә баҫым яһаны. Милләт-ара мөнәсәбәттәр иң мөһим, ҡатмарлы һәм иң нескә мәсьәләләрҙең береһе, ул үҙенә ҡарата айырым иғтибар талап итә. Милләт-ара мөнәсәбәттәргә нигеҙләнгән бәхәс һәм талаш-тауыш, ҡағиҙә буларак, тап урындарҙа килеп тыуа ла инде. Бирюлево ваҡиғаһын телгә алып, В.Путин урындағы властарҙың йыйылдар буйы йыйылып килгән халыҡ ризаһыҙлығын, халыҡ тауышын ишетмәүе, һаңға һукмауы бәләһе тип атаны. "Урындарҙағы хәлде нисек бар, шул килеш белергә теләмәгән, бер ниндәй саралар күрмәгән һәм кешеләрҙе ишетмәгән властың нимәгә кәрәге бар?"- тине Президент. Ул шулай уҡ ситтән килеүселәрҙең миграция законлары, хоҡуҡ тәртиптәрен боҙоусы законһыҙ ғәмәлдәренә юл ҡуйырға ярамағанлыкты тағы бер ҡат иҫкә төшөрҙө. Ошо көндәрҙә Федераль Йыйылыш палаталары тарафынан төбәк һәм муниципаль властарҙың вәкәләтлектәрен билдәләү һәм килеп тыуған милләт-ара конфликттар, уларҙы алдан киҫәтә алмағандары өсөн етәкселәрҙе вазифаларынан бушатыуға тиклем саралар күреү тураһында закон ҡабул ителеүе хаҡында хәбәр итте."Милләт-ара конфликттарҙы иҫкәртеү буйынса бер таптҡыр ҡулланылған, "яңғын һүндереүсе" сәралар файҙаһыҙ", тине ул һәм был йәһәттән дәүләт милли сәйәсәтенең яңы Стратегияһында сағылдырылғанса, заманса, системалы эшсулдар кәрәклеген билдәләне.

Сығышының һуңында Рәсәй Президенты "Рәсәй милләтенең берҙәмлеген нығытыуҙағы өлөшө өсөн" йыллыҡ дөйөм Рәсәй йәмәғәтселек премияһын булдырырға тәҡдим итте.

В.В.Путиндың сығышынан һуң дәүләт власының федераль органдары етәкселәре, дөйөм Рәсәй милли-мәҙәни берекмәләре, фән һәм эксперт берләшмәләре вәкилдәре ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәл рәүешендәге фекер алышыуҙар менән Совет ултырышы тамамланды.

Рәсәй Президенты В.Путин шулай уҡ Үҙәк Диниә назаратының 225 йыллығына арналған тантаналы сарала ҡатнашты. Диниә назараттары мөфтөйҙәре менән осрашыуҙа дәүләт менән мосолмандарҙың дини ойошмалары араһындағы бәйләнештең көнүҙәк мәсьәләләре ҡаралды.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Рекорд ҡуйылманы. Алты вагондан торған, 370 тонна ауырлығындағы тимер состав урынынан ҡуҙғалманы. Тамашаны ҡарарға килгән ике йөҙләп кеше, республика һәм федераль кимәлдәге киң мәғлүмәт саралары журналистары, вокзалда ҡыҫҡа ялға туктаған поезд пассажирҙары тарихи ваҡиғаға шаһит булманы. Алтынсы ынтылыштан да поезд ҡуҙғалмағас, эргәлә торған егет "Ике йөҙ һумға бәхәсләшкәйнем", тип көлөмһөрәп ҡуйҙы. Иптәшенең "Һин ысынлап та Эльбрустың поезды ҡуҙғата аласағына ышана инеңме?" тигән һорауына, "Ә һин уның шундай еңеллек менән трамвайҙарҙы, самолеттарҙы, карaптарҙы һөйрәтеүен күрмәнеңме ни?!" тип ҡырт киҫте.**



# ЭЛЬБРУС БАТЫР...
## тағы майҙан тотто

Башҡорт баһадиры әйтеүенсә, уның спорт карьераһында (дөрөҫөрәге, рекордтар ҡуйыуында) был беренсе форс-мажор. "Былай хәлдең булғаны юҡ ине. Әлбиттә, рекордтар енел бирелмәй. Былна был поезды ла күнекмә ваҡытында күсерә алғайным, әммә халыҡ, журналистар алдында ул ҡуҙғалырға теләмәне. Хәҙер был рекорд ниндәйҙер ваҡытҡа тиклем кисектерелеп торасаҡ. Һүҙ бирәм, мин был рекордты барыбер ҡуясаҡмын!"- тине Эльбрус Ниғмәтуллин йыйылыусыларға.

Ысынлап та, дүрт йыл элек ул Өфөлә, Ағиҙел йылғаһында 760 тонналыҡ ҡоро йөк ташый торған карапты 20 метрға тиклем һөйрәп барҙы. Яныраҡ ҡына, июль аҙаҡтарында, Силәбелә дөйөм массаһы 100 тоннанан артыҡ ете трамвайҙы һөйрәне. Башҡа төр транспорттарға ла көсө етте. Күнекмәләр ваҡытында әлеге поезд да урынынан ҡуҙғалды ҡуҙғалыуға һәм быға йыйылған халыҡтың байтағы шаһит булды. Ләкин билдәләнгән ваҡытта, рәсми комиссия, журналистар йыйылған мәлдә, состав баһадирыбыҙҙың көсөнә ҡаршы тора алды. Был хәлгә һауа шарттары ла, башҡа сәбәптәр ҙә ҡаршылыҡ тыуҙырыуы ихтимал, тине ойоштороусылар.

Шулай ҙа рекордтың ҡуйылмауы халыҡты артыҡ көйөндөрмәне. Сөнки "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" титулына эйә был баһадирҙың мөмкинлектәрен, уның әленән-әле кешенең тәбиғи мөмкинлектәренә саҡырыу ташлап тороуын беләбеҙ. Үҙендән (Эльбрус Ниғмәтуллиндың ауырлығы 130-140 килограмм тирәһе) 3000-5000 тапҡырға ауыраҡ йөктө һөйрәп, урынынан ҡуҙғатыу - ысынлап та, кешенең тәбиғи мөмкинлектәренә саҡырыу ташлау ул. Ул шулай уҡ, ир-егет сифаттары юғала бара, тип саң ҡағылғанда, донъяның "цивилизациялы" дәүләттәрендә бер енес вәкилдәренән торған ғаиләләр рөхсәт ителгәндә, Халыҡ-ара олимпиада комитетының ысын ир-егеттәр генә шөғөлләнә торған көрәш төрҙәрен олимпиада исемлегенән алып ташлау мәсьәләһен алға һөргәнендә, ысын ҡиммәттәрҙе юғалта барған һәм либерализм идеологияһына йотолған йәмғиәткә саҡырыу ҙа булып күҙаллана. Был рекорд (рәсми рәүештә ҡуйылмаһа ла, Гиннесс китабына теркәлмәһә лә - ул рекорд) ана шул ысын йәмғиәт ҡиммәттәрен, тәбиғәт ҡанундарын үҙгәртергә тырышыусыларға ҡаршы сығыу ҙа ул. Ир-егетлек, баһадирлыҡ әле юғалмаған, ир-егет барыбер тарих һуҡмағы буйлап үҙенең "көслө зат" тигән дәрәжәһен, мәртәбәһен күтәреп барасаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕТЕМДӘРҺЕҘ ҠАЛА БУЛЫРҒА!

**Ульяновск ҡалаһында Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды тарафынан ойошторолған "Бергәләп - балалар хаҡына!" IV Бөтөн Рәсәй күргәҙмә-форумында Өфө ҡалаһы илдең барлыҡ федераль округынан килгән 60 субъект араһында лидер булып танылды.**

Беҙҙең төбәктең интерактив күргәҙмә майҙанында ғаиләне алмаштырыусы, ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләр, интернат учреждениеларында тәрбиәләнеүселәр менән эшләүҙең технологиялары һәм методикалары, шулай уҡ Фонд менән берлектә тормошҡа ашырылған проекттар һөҙөмтәләре күрһәтелгән. Форум йомғаҡтары буйынса Башҡортостан делегацияһының "Кала - балалар өсөн" номинацияһында алдынғы тип танылыуына аптырайһы түгел, сөнки Өфө ысын мәғәнәһендә республиканың баш ҡалаһы ғына түгел, етемдәрһеҙ ҡала статуысын яҡлау өсөн дә тырыша. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, бөгөн Өфөлә ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған етем балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыуҙың уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыу, тәрбиәгә бала алған ғаилә, опека (попечителлек), патронат ғаилә төрҙәре үҫешә. Әлеге ваҡытта 3177 етем бала ғаиләне алмаштырыусы ғаиләләрҙә йәшәй (1112-һе - уллыҡҡа алынған, 1704-е - опека (попечителлек) тәрбиәһендә, 236-һы тәрбиәгә бала алған ғаиләләрҙә, 125 бала патронат тәрбиәлә). Был, әлбиттә, 2009 - 2013 йылдарға ҡуҙалланған "Башҡортостан баш ҡалаһының ғаиләне алмаштырыусы ғаиләһе" маҡсатлы программаһына ярашлы алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһе. Был эшмәкәрлек шулай уҡ интернат учреждениеһында булған балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыуға ла этәргес биргән. Мәҫәлән, 2009 йылда - 588, 2010 - 530, 2011 - 500, 2012 йылда 465 бала ғаиләләргә алынған. Бөгөн баш ҡаланың интернат учреждениеларында 451 бала иҫәпләнә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Яҙыусылар союзының сираттағы 14-се съезы уҙҙы. Башҡортостандан унда өс делегат ҡатнашты: БР Яҙыусылар союзы рәйесе Риф Тойғонов, РФ Яҙыусылар союзы секретары Михаил Чванов, билдәле яҙыусы һәм сәйәхәтсе, шулай уҡ Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы Камил Йыһаншин.

✓Өфөнөң Дим районында яңы "Мәҙинә" мәсете асылды. Ваҡиға Рәсәйҙең үҙәк диниә назаратының 225 йыллыҡ юбилейына арналды. Ғибәҙәтхананы биҙәү эшендә Сәмәрҡәндтән рәссамдар, Мысырҙан ағастан һырлап биҙәк яһаусылар ҡатнашты. Төп эштәрҙе урындағы оҫталар эшләне. Ағастан селтәрләп эшләнгән үрелмәләр һәм диуарҙарға гәрәп телендә яҙылған Ҡөрьән аяттары йәш оҫта Йонос Хәйруллиндың ҡулдары менән башҡарылған. Яңы мәсеткә бер үк ваҡытта 600 кеше һыя.

✓Илебеҙ баш ҡалаһында уникаль мәҙәни ваҡиға булды - "Донъя классикаһы шедеврҙары - Бөтә Рәсәй өсөн" проекты сиктәрендә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры һәм Империя Рус балеты Мәскәү тамашасыларына Арам Хачатуряндың "Спартак" легендар балетын күрһәтте. Баш ҡалала ҡуйған спектакле менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры труппаһы Рәсәй буйлап гастроль турын асты. Легендар спектаклдә Тулала, Архангельскиҙа һәм илебеҙҙең башҡа бик күп ҡалаларында ҡарай аласаҡтар.

✓Пассажирҙар 2013 йылдың 1 декабренән 20-һенә тиклем "Алдан пландаштырығыҙ" махсус тарифы буйынса йөрөгән "Федераль пассажирҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте поездарының купе вагондарына 50 процентҡа тиклем ташлама менән билет һатып ала аласаҡ. "Алдан планлаштыр" тарифы дәүләт эсендә йөрөгән бөтә поездарға ҡағыласаҡ. Тик ул "Динамикалы хаҡтар" программаһына ингән поездарға ғына ҡағылмай. Билеттарҙы ташлама менән алырға мөмкин булған поездар исемлеге Куйбышев тимер юлы сайтында баҫылған.

✓Урта дөйөм белем биреү, музыка һәм сәнғәт мәктәптәре уҡыусыларына Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының исемле стипендиялары тапшырылды. Быйыл был мәртәбәлә бүләклөүгә 36 бала лайыҡ булды. Уларҙың күбеһе уҡыу алдынғыһы ғына түгел, ә төрлө конкурстарҙа, фестивалдәрҙә еңеүселәр.

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# ӘҘЕР БУЛЫҒЫҘ...

## тәүге һалҡындарға!



**Тиҙҙән тәбиғәттең кешегә ҡарата ҡылған иң аҫтыртын мәле етә - ҡаты ҡырауҙар һәм улар артынса уҡ юлдарҙа боҙлауыҡтар барлыҡҡа килә башлай. Үткән аҙна башында уҡ синоптиктар ҡар ҡатыш ямғыр вәғәҙә иткәйне. Урыны менән, ысынлап та, ҡар ҡатыш ямғыр яуҙы һәм ул ағастарға, электр сымдарына ятты, юлдарҙа боҙлауыҡ барлыҡҡа килде. Тәбиғәттең көтөлмәгән (хәйер, уны көтөлмәгән тип тә булмай, бындай күренештәр йыл һайын ҡабатлана, әммә халыҡ үҙе генә ғәмһеҙлегенә бирелеп, ваҡытты һуҙып, боҙлауыҡ мәленә алдан әҙерләнмәй, хәстәрлек күрмәй) хәл-ваҡиғаларына әҙер булыу өсөн баш ҡаланың "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" бер нисә кәңәшкә ҡолаҡ һалырға саҡыра.**

Тәү сиратта, автомобилдәрегеҙҙең йәйге тәгәрмәстәрен ҡышҡыһына алмаштырыу мотлаҡ. Әгәр һауа температураһы +5, +7 тирәһендә тирбәлә икән, тиҙ арала шиномонтажға мөрәжәғәт итеү зарур. Әлегә уларҙа һыу буйындай сират тойолмай, шуға күрә автомобилегеҙгә "ҡышҡы аяҡ кейеме" кейҙереү оҙаҡ ваҡытығыҙҙы алмаҫ. Бер нисә аҙна асфальтта ҡышҡы тәгәрмәстәрҙә елдерһәгеҙ ҙә бер ниндәй ҙә зыян юҡ, уның ҡарауы, ныҡлап ҡар ҡатыш ямғыр яуа башлауға тулыһынса әҙер буласаҡһығыҙ.

Көҙгә тәүге оҙайлы ямғырҙар башланыу менән машина йөрөтөү стилен үҙгәртегеҙ - тиҙлегегеҙҙе кәметегеҙ, машиналар араһындағы дистанцияны ҙурайтығыҙ, ҡапыл туҡтарға тырышмағыҙ, кинәт боролоштар яһамағыҙ һәм бер кәрәкмәгәнгә бер һыҙаттан икенсеһенә күсергә тырышмағыҙ. Һеҙҙең һәр маневрығыҙ башҡа водителдәргә аңлайышлы һәм улар өсөн дә хәүефһеҙ булырға тейеш. Ҡайһы яҡҡа боролғанығыҙҙы күрһәткән уттарығыҙҙы яндырырға онотмағыҙ! Әгәр машинағыҙҙа автомат коробка икән, овердрайв системаһын һүндереп тороғоҙ. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен ҡабаттан күҙҙән үткәреп сыҡһағыҙ ҙа ҡамасауламаҫ. Сөнки тап унда водителдәрҙең транспорт саралары менән идара иткәндә метеорология шарттарын иҫәпкә алыу бурысы тураһында яҙылған.

Машинағыҙҙа һәр саҡ буксирға алыу өсөн арҡан һәм быялаларҙы йыуыу өсөн туңмай торған шыйыҡса булырға тейеш.

Беренсе ҡырау һәм боҙлауыҡ ваҡытында бигерәк тә күперҙәрҙә, юлдар киҫелешендә, юл үрендә иғтибарлы булығыҙ.

Быяса ҡышын руль артына ултырмаған йәш водителдәр өҫтәмә курстар алһа ла зыян итмәҫ. Тап ошо ваҡытта һеҙ үҙегеҙгә кәрәкле тәжрибә лә туплаясаҡһығыҙ, машинағыҙҙың теге йәки был осраҡта ниндәй "характер" күрһәтеүен дә асыҡлаясаҡһығыҙ.

Шуны хәтерегеҙҙән сығармағыҙ: асфальт ямғыр башланған ваҡытта бик мәкерле һәм хәүефлегә әйләнә - бысраҡ һәм туҙан еүешләнгән, әммә тулыһынса йыуылып төшмәгән, тап ошо ваҡытта юлдарҙа үҙенсәлекле тайғаҡ бер ҡатлам барлыҡҡа килә. Был осорҙа бик һаҡ йөрөгөҙ, хәрәкәт итмәй, туҡтап, көтөп торһағыҙ ҙа була. Бигерәк тә төнөн ҡырау төшкәндә (юлдарҙағы йөҡаҡ ҡына боҙ ҡатламы күҙгә лә күренмәй) һәм иртән юлдарға томан ятҡанда бик иғтибарлы булыу кәрәк

Ситтәге тәҙрәләрҙе һәм көҙгөләрҙе һәр саҡ таҙа тотоғоҙ, фараларығыҙҙың һәм "дворниктар"ҙың эшләүен алдан уҡ тикшереп ҡуйығыҙ.

Йәйәүлеләргә бигерәк тә иғтибарлы булығыҙ! Ҙур көләпәрәле курткалар, муйынға уралған шарфтар күреү мөмкинлеген сикләй, шуға күрә улар автомобиль килеүен дә күрмәүе ихтимал. Ә инде өҫ кейемдәрендә фликерҙар - микро призмалы яҡтылыҡ сағылдырыу сығанағы - булмауы водителдәрҙән киске эңер һәм ҡараңғы ваҡытта ла ныҡлы иғтибар талап итә.

Шулай ҙа, хатта тәжрибәле водитель булһағыҙ ҙа, боҙлауыҡтың беренсе көнөндә машинала юлға сыҡмай тороуығыҙ хәйерле: руль артына тәжрибәләре бик аҙ булыусылар ҙа ултыра, һәм улар ғәйебе менән һеҙҙең дә юл-транспорт ваҡиғаһына эләгеүегеҙ мөмкин. Һалҡынланғанды Хоҙай һаҡлар, тиҙәр, шулай ҙа, аварияға эләктегеҙ икән, шунда уҡ "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" һандарын йыйығыҙ. Берҙәм ҡотҡарыу хеҙмәтенә кеҫә телефонынан сим-картаһыҙ ҙа, иҫәбегеҙҙә аҡса булмағанда ла, хатта телефондың клавиатуралары блокировкала саҡта ла шылтыратырға мөмкин.

# БӨТӘГЕҘ ҘӘ - "ҠАЛА МӨХИТЕ"НӘ!

**"Ҡала мөхите" IX социаль реклама фестиваленә конкурс эштәре килеүе дауам итә. Әлегә барлығы 150 эш ҡабул ителһә, баһалама комиссияһы уларҙы 1 ноябрҙән ҡарай башлаясаҡ.**

Конкурстың быйылғы тематикаһы "Әйҙәгеҙ, таҙа ҡалала йәшәйек!" тип атала һәм Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы менән ауаздаш. Шуға ла сараны ойоштороусылар айырыуса экология, ҡаланың таҙа урамдары, ҡала мөхитенең имenлеге темаларына ҙур иғтибар бирә. Шулай ҙа башҡа көнүҙәк социаль темалар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ.

Әлеге ваҡытта фестивалдең программаһы әҙерләнә, уға, ғәҙәттәгесә, социаль реклама буйынса белгестәрҙең ҡыҙыҡлы мастер-класстары инәсәк. Гран-при яулаусы 50 мең һум күләмендәге призға эйә буласаҡ. "Сәләмәт тормош рәүеше", "Экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау", "Хәрәкәт - тормош!" махсус номинацияларында еңеүселәр 30 мең һумды кеҫәләренә һаласаҡ. Ә "Коррупцияға ҡаршы" махсус булдырылған яңы номинацияла еңеүсегә иһә ҡала округы хакимиәтенең призы тапшырыласаҡ. Икенсе-өсөнсө урындарҙы алыусылар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ.

ҺОРАУ - ЯУАП

# УРТАҠ ТЕЛ ТАПМАҺАҢ - СУДЛАШ

**Муниципаль фатирҙа яңғыҙым йәшәйем; әсәһе менән айырым торһалар ҙа 2010 йылда ейәнсәремде терkәнем, ләкин уның килеп күренгәне лә юҡ. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн дә үҙем түләйем. Әле фатиримды хосусилаштырырға йыйынам, бөтөн документтар әҙер, ләкин ейәнсәрем документҡа ҡул ҡуйырға килмәй. Миңә ни эшләргә?**

- Әгәр ейәнсәрегеҙ хосусилаштырыуҙа ҡатнашһа, фатирығыҙға ул да хужа буласаҡ. Йәғни һеҙ фатирға тулыһынса түгел, ә өлөшләтә хужа булаһығыҙ. Әгәр ейәнсәрегеҙ хосусилаштырыуҙа ҡатнашмайынса, һеҙҙең өсөн генә ризалыҡ биргән хәлдә лә был торлаҡ менән сикләүһеҙ ваҡытҡа файҙаланыу хоҡуғында ҡала. Был осраҡта ул милексе булып тормаһа ла уны теркәүҙән төшөрөү мөмкин булмаясаҡ. Ейәнсәрегеҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙ бик яҡшынан түгел икән, бәлки, уның хосусилаштырыуҙа ҡатнашыуын талап итеү кәрәкмәйҙер ҙә? Әгәр ул һеҙҙең менән йәшәмәй һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәй икән, уның был торлаҡ менән файҙаланыу хоҡуғын юғалтыуын таныу тураһында судҡа юллау ғаризаһы менән мөрәжәғәт итергә лә була. Закон буйынса, яллаусы һәм уның ғаилә ағзалары икенсе урынға йәшәргә киткән осраҡта улар сығып киткән көндән алып социаль яллау килешеүе өҙөлгән тип иҫәпләнә (Торлаҡ кодексының 3-сө бүлеге, 83-сө статьяһы). Шуның өсөн юллау ғаризаһында ейәнсәрегеҙҙең әсәһе менән икенсе ерҙә йәшәүе, фатирығыҙҙа уның һеҙҙә йәшәү билдәләре (кейемһалымы, башҡа әйберҙәре ) юҡлығы, үҙенең дә килмәү фактын күрһәтегеҙ. Шул уҡ ваҡытта ейәнсәрегеҙҙә фатирығыҙ менән файҙаланыуҙы бер ҡасан да сикләмәүегеҙ хаҡында ла белдерегеҙ. Һәм мотлаҡ коммуналь түләүҙәрҙе үҙегеҙ түләүегеҙ хаҡында яҙығыҙ. Ғаризағыҙҙа ейәнсәрегеҙҙең һеҙҙең менән йәшәмәүен раҫлай алырҙай шаһиттарҙы(иң яҡшыһы - күршеләрегеҙҙе ) күрһәтергә онотмағыҙ. Әгәр суд ейәнсәрегеҙҙең торлаҡ менән файҙаланыу хоҡуғын юғалтыуын таныһа, ул теркәүҙән төшөрөлә һәм фатирҙы хосусилаштырыуҙа ҡатнаша алмаясаҡ.

Шуныһы ла бар: яҡындарың менән судлашыуы яҡшы ғәмәл түгел, әлбиттә. Әгәр быға әҙер түгел икәнһегеҙ, судлашырға теләмәүегеҙҙе белдереп, тағы бер тапҡыр һәйбәтләп кенә һөйләшеп ҡарағыҙ, бәлки, ул да хәлде киҫкенләштерергә теләмәҫ.

# ЯРТЫЛАШ ХУЖА БУЛҺАҢ...

**Ирем менән ауылдан бер йорттоң яртыһын һатып алдыҡ. Шуға төкәтмә төҙөп, унда аш бүлмәһе менән ванна урынлаштырырға уйлайбыҙ. Йорттоң икенсе яртыһында йәшәүсе күршеләрҙән рөхсәт алғанбыҙ, ә быны архитекторҙан ризалыҡ кәрәкме? Тағы ла: атай-әсәйемде теркәү өсөн дә күршеләрҙән ризалыҡ алырғамы икән?**

- Йортто үҙгәртеп ҡороу һәм башҡа төҙөләш эштәре өсөн урындағы хакимиәттән рөхсәт алығыҙ (РФ Ҡала төҙөлөшө кодексының 51-се статьяһы, 1-се пункты). Йортоғоҙҙо үҙгегеҙ теләгәнсә үҙгәртеп ҡороу өсөн ҡайһы бер документтар ҙа юлларға тура килеүе бар, был турала ентекләберәк урындағы хакимиәттән белешегеҙ. Төҙөләш эштәрегеҙ тамамланғас та уны законлаштырырға мөмкин, ләкин ул саҡ мәшәҡәте күберәк була, ҡайһы саҡ судҡа ла мөрәжәғәт итергә тура килә.

Аңлашылыуынса, һеҙ был йортта өлөшләтә милексе булып тораһығыҙ, был осраҡта яңы кешене теркәү өсөн бөтә милекселәрҙең дә ризалығы кәрәк. Әгәр ҙә һеҙ яртылаш милексе түгел, ә бүленгән өлөшкә тотошлайы менән милекселек хоҡуғын дәүләт теркәүе тураһындағы таныҡлыҡҡа эйә икәнһегеҙ, ул саҡта күршеләрҙең ризалығы кәрәкмәй (РФ Граждандыҡ кодексының 247-се статьяһы, 1-се пункт).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үлəндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары

**Күремдең аҙ килеүе**

❖ 10 грамм киптерелгән алабута япрактарын эмаль һауытҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 30 минут ҡайнап ултырған һауытта тотҡас, бүлмә температураһында 15 минут һыуытырға, һөҙөргә, быяла һауытҡа һалырға. Һалҡын ҡараңғы урында ике көндән оҙаҡ һаҡламаҫҡа. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ-лап ҡабул итергә.

❖ 1 кг һуғандың ҡабығын әрсеп алырға. Ике стакан ҡайнар һыу ҡойғас, талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға. Һыуытырға, һөҙөргә. Ике көн дауамында иртәнсәк ас ҡарынға ярты стакан эсергә.

❖ Ярты стакан һыуҙы ҡайнатып сығарырға һәм ул ҡайнауҙан туҡтарлыҡ итеп утты кәметергә. 4 грамм туралған рута үләнен һалып, 15 минут бешерергә, тик һыу ҡайнап сыҡмауын күҙәтеп тороғоҙ. Һөҙөргә, иртән ошо дозаны тотошлай ас ҡарынға эсергә. Бынан һуң 5-6 сәғәт бер нәмә лә ашамаҫҡа. Дауаланыу бер тапҡыр ғына үткәрелә.

## Баш әйләнһә...

Бер семтем ҡуҙаҡлы ҡыҙыл әсе боросто бер стакан йылы һыуға һалып, бер нисә бәләкәй генә йотом эшләргә. Һыу һәм борос ҡанды "ҡыҙҙырып", уны баш мейеһенә ҡыуасаҡ, башығыҙ асылып ҡаласаҡ. Тағы ла бер боронғо рецепт. Баш әйләнгәндә һәм ауыртҡанда көнөнә ике тапҡыр танауға 10-ар тамсы алма һеркәһе тамыҙырға. Дауаланыу курсы - 3-4 көн. Әгәр ҙә һеркәнең концентрацияһы түбән икән (3-4 проценттан түбән), дауаланыу оҙаҡҡараҡ һуҙыла.

## Гемоглобин

Гемоглобин түбән булһа, 150-шәр грамм кишер, мүк еләге һәм ҡара торма һутын алырға, ҡара төҫтәге быяла шешәгә ҡойорға һәм һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Осоҡтан им-том

**Салынған әтәсте, тауыҡты өс-ете юл сатына ташлау.** Кеше енләнеп ауырыһа, әтәс йә тауыҡ салалар. Салыу ҡаны ергә ағырға тейеш түгел. Шуға күнәктә генә салалар. Салған саҡта өс тапҡыр:

*Ауырыуға им булһын,*
*Рәнйеүҙән шифа булһын! -*

тип әйтәләр. Шунан уны, ауырыуҙан алынған сепрәк менән урап, шәм яҡтыһында осоҡлап, өс-ете юл сатына алып барып ташлайҙар.

**Осоҡ ауырыуы ел менән ҡағыла.** Кеше енләнә. Осоҡто ташлап ҡайтҡанда, сир йә эт булып сыйылдап, йә ҡош булып сутылдап, кеше эргәһенә килгеләй.

**Ҡурсаҡ күсереү.** Осоҡтан һуғылған ауырыуҙы ла осоҡлайҙар. Шул ваҡытта был кешенән сир (рәнйеү) китә. Сағыу сепрәктән ҡурсаҡ эшләйҙәр. Шул ҡурсаҡҡа ярсыҡтарҙан, балсыҡтан һауыт-һаба яһайҙар. Шуларҙы ауырыу кеше янына һалалар (кисен йә иртәнсәк). Был һауыт-һаба, ҡурсаҡтар бер көн буйы ауырыу эргәһендә ятырға тейеш. Ҡояш байып, кеше аяғы һил булғас, таң менән имсе осоҡто алып: "Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ! Бына һиңә туҫтаҡ, бына һиңә ҡалаҡ. Әйҙәгеҙ, һеҙҙе ҡунаҡҡа алып китәм!" - тип сығып китә. Рәнйеү ҙә шулар менән китергә тейеш.

Рәнйеү ҡыуыусылар юл яңылыштырыу өсөн артҡа ҡарамай ғына икенсе кешенең өйөнә инә. Улар ауырыу янына бер көн буйы килмәй.

**Һепертке име.** Сирҙәрҙе һепертке осо менән осоҡлайҙар. Ауырыуҙың тәненә бер нисә тапҡыр төртәләр ҙә әйтемләйҙәр:

*Осоҡ, осоҡ,*
*Ҡайҙан килдең, шунан сыҡ!*
*Осоҡ, осоҡ, ослanған,*
*Сырхауымды ураған,*
*Сырхауымды ураған да*
*Үҙенә иш урлаған!*

**Әҙрәсмән үләне менән осоҡлау.** Әҙрәс үләнен яндырып, төтөнө менән осоҡлайҙар. Ауырыуҙың сәсенән бер бәләкәй өлтөк киҫеп алып, яулыҡҡа һалалар һәм шуны баштан әйләндереп алалар. Әйләндергәндә:

*"Имең-томоң шул булһын,*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит!"* - тип һамаклайҙар.

**Таң һыуы менән имләү.** Берәйһенә күҙ тейһә, имсе әбей тәһрәтләнеп, намаҙын уҡып, бик иртә, ҡояш тыумаҫ борон һыуға төшә. Доғаһын уҡып, һыу ала. Шул һыу менән баланы сайындыра. Һыуҙы өс тапҡыр шаршамбы көндө алырға һәм шуның менән ҡойондорорға кәрәк. Ҡойонған һыуҙы "баҫылһын", тип юлға һибәләр. Һыуҙы "Аятел ҡөрси"доғаһын уҡып, кем алһа ла була. Күп алырға ярамай. Алғас, ҡайнаталар, өшкөрәләр, шунан шул һыу менән ауырыуҙы ҡойондоралар.

**Осоҡ һәм һүҙ.** Осоҡлау йолаһын үткәргәндә һүҙ магияһы ла ҡулланыла, һәр төбәктә тип әйтерлек осоҡлауҙың доғаһы барлығын әйттеләр һәм яҙҙырҙылар. Улар мәғәнәүи яҡтан яҡын, шуға миҫал өсөн бер нисә генә доға бирелә:

*Осоҡ булһаң, осоп ҡайт,*
*Ереңә ҡайт, һыуыңа ҡайт,*
*Ҡайҙан килдең, шунда ҡайт,*
*Амин шул булһын.*
*Осоҡ булһаң, осоп кит,*
*Тауҙан килһәң, тауға кит,*
*Таштан килһәң, ташҡа кит,*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит.*
*Был бахырҙа ниең бар?*
*Яр аҫтында өйөң бар.*
*Бар кит, ос! Мине күп этләнең,*
*Инде һимеҙ кешегә бар,*
*Йомшаҡ түшәклегә бар!*

- тип ҡағып-һуғып алып китәләр, тиҙәр ололар. Уртаҡ мотив булып, осоҡто мотлаҡ ҡыҙыл эңерҙә ташлау, ыҙандан һуң артҡа әйләнеп ҡарамай ҡайтыу, эҙ яҙлыҡтырыу өсөн бер нисә өйгә инеү һ.б. тора.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ЯҢЫ РУБРИКА: УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ...

**Бәләкәй генә әле ҡыҙым, биш йәштә генә. Ә шулай ҙа уның тәрбиәһенә нығыраҡ иғтибар итәм, уның менән ололарса һөйләшергә тырышам. Йыш ҡына уның киләсәген, кейәүгә сығасағын, балалар үҫтерәсәген уйлап, йөрәгем һулҡылдап китә. Ҡыҙғанам ҡыҙ баламды. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙ баланың бәхете кейәү ҡулында, балалар һөйөүендә икәнен дә яҡшы аңлайым. Кейәүемдең нисек булырға тейешлеген күҙҙән үткәрәм.**

# ҠЫҘ БАЛАҠАЙЫМДЫ ҠЫҘҒАНАМ,

## йәки Маңҡа кейәү кәрәкмәй!



Кейәүем төҫкә-башҡа матур. Ҡараштары яғымлы. Кәүҙәһе ҡарағайҙай төҙ, ныҡ. Каратэ кеүегерәк берәй көрәш төрөндә ҡара билбауы бар. Ҡиммәтле сит ил машинаһында елдерә. Йорт-ере, үҙенең эше бар икән, ти. Ялланып эшләмәй, тимәксемен. Шул тиклем ыҫпай, иманлы, замандан артта ҡалмаған һәм рухлы башҡорт егете. Ауыҙынан бер насар һүҙ сыҡмаҫ. Ымхәрәкәте, ҡарашы менән дә ҡыҙымды ҡыйырһытмаҫ, рәнйетмәҫ.

Ҡыҙыбыҙҙы атай-әсәйе менән матур итеп һоратырға килерҙәр, шартына килтереп, бар йолаларҙы үтәп, килен итеп төшөрөрҙәр. Артабан ҡыҙыбыҙ яратҡан ире менән бал өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек иркәләнеп, наҙланып йәшәр, беҙҙе гел генә яҡшы һүҙ, арыу яңылыҡ менән ҡыуандырып торор. Йыш ҡына ҡунаҡҡа килерҙәр, үҙебеҙ ҙә уларға бара йөрөрбөҙ.

Кейәүебеҙ ҡыҙыбыҙға бер ҡасан да ауыр һүҙ әйтмәҫ, тормош ауырлыҡтарын уның иңенә һалмаҫ, барыһын да үҙе хәл итергә тырышыр. Ә ҡыҙым балаларын ҡарап, тыныс ҡына өйҙә ултырһын, яратҡан эше менән булышһын, шул эше буйынса үҙен үҫтерһен, кәрәк икән, берәй фирма асһын да, артыҡ көсәнмәй генә идара итһен. Аҙнаһына биш көн буйы һигеҙәр сәғәт эштә бил бөкмәһен, ҡырҡҡа ярылырҙай булып йөрөмәһен бер ҡасан да, тиеүем. Аҡса табам, тип сапмаһын. Ире нимә кәрәк, барыһын да алып бирһен, мохтажлыҡ күрһәтмәһен.

Кейәү беҙҙе лә хөрмәт итһен, шундай һылыу, аҡыллы ҡыҙ үҫтереп биргәнебеҙгә рәхмәтле булһын. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар менән дә бик татыу булайыҡ. Балаларыбыҙ бәхетенә бергәләп ҡыуанайыҡ.

Бына шулайыраҡ күҙ алдына килтерәм ҡыҙымдың тормошон. Ата-әсә, ғәҙәттә, үҙенең тормошҡа ашмаған хыялын балаһы тормошҡа ашырыуын теләй, тиҙәр. Юҡ, ни бары ҡурҡмай хыялландым ғына. Һәм был хыялымдың ысын булырына ышанысым ҙур. Ғөмүмән, бөтә әсәйҙәр ҙә ҡыҙҙарының наҙлы сәскә кеүек йәшәүен теләй бит. Алһыу кейемдәр, суҡлы бантиктар менән биҙәп, һәр һүҙенә иғтибарлы булып, һәр һорауына яуап бирергә тырышып, наҙлап-бәпләп үҫтергән балаңа тағы ниндәй тормош теләргә була һуң?

Әммә йәшәйештең бөгөнгө әсе хәҡиҡәте икенсене һөйләй шул. Ҡыҙ бала егеттең ата-әсәһенә лә, ниндәйҙер сирҙәре барлығына ла, һаҫып, тәмәке тартып йөрөүенә, шешә төбөнә ҡарарға әүәҫлегенә лә ҡарамай, "Яратам!" тип кенә кейәүгә сығырға атлығып тора. "Яратам"ын алып ташлаһаң, ул маңҡаның бер нәмәһе лә юҡ. Рәхәт тормошта йәшәтә аламы ул һинең ҡыҙыңды? Юҡ! Ай-һай күбәйеп китте бит ошондай "мөхәббәт" менән ғаилә ҡороусылар....

Ярай, эсмәй-тартмай ҙа икән ти. Йәки тарта, ләкин эсмәй. Эсә, әммә самалап, байрамдарҙа ғына, ял иткәндә, тигән вариантты индерергә лә була бында. Ялҡау бит, әй, аҡса эшләй белмәй. Өйҙә бер сөй ҡаҡмай, кран йүнәтмәй. Йүнселлеге юҡ. Ҡыҙың йүгерә инде шунан, билен биштән быуып. Әлеге ваҡытта ошондай ғаиләләр ҙә бихисап. Ир һигеҙ сәғәтлек эшендә йөрөп ҡайта ла (унда нимә һәм нисек эшләй, бер Хоҙай белә)... Иманым камил, шул ваҡыттың өс-дүрт сәғәтен генә эш тип әйтеп була, ҡалғаны - "Вконтакте" сайты, тәмәке тартыу, гәп-ғәйбәт, төшкө аш, кофе һ.б. Эйе, ҡайта ла, ҡатыны әҙерләгәнде ашай һәм артабан ләззәтләнеүҙе дауам итә - телевизор йә компьютер уйындары, йә тағы ла "Вконтакте" сайты. Бахыр ҡатын үңәсе өҙөлә яҙып бешерә, үтекләй, йыуа, мыжып та ала - һәм шул уҡ ваҡытта ҡәнәғәт тә. Ниңә ҡәнәғәт булмаҫҡа - ире бар, эшкә йөрөй, ай һайын эш хаҡы ала, һәр хәлдә, ул аҡсаһы кредиттарҙы түләргә етә... Тәк вут, ошо ир эшкә барып ҡайтыуын оло батырлыҡҡа һанай, ә ғаилә килемен тағы ла нисегерәк арттырырға була - уйламай. Бар өмөтө - премия, эш хаҡының ноль-ноль процентҡа артып китеүе. Ошондай йонсоу тормоштан ҡыҙығыҙ ҙа йонсор, яманайыр, ябығыр, өҫтөндәге кейемдәре арзан ғына, төҫһөҙ генә булыр. Аллам һаҡлаһын!

Тағы ла бер төр маңҡа кейәүҙәр була. Ярай, егәрле, йүнсел, ти. Бизнесы уҡ булмаһа ла, арҡыры ятҡанды буш ҡалдырмаҫ, юҡтан бар яһарға тырышыр. Әммә... аҡыра ла баҡыра. Эшендәге уңышһыҙлығына, шефтың саҡ ҡына ҡырын ҡарауына ҡатыны минауат. Аш тоҙһоҙ, былау ҡоро, бәлеш уңмаған - ҡатын эшкинмәгән. Хатта балаһы уйнап йөрөгән еренән ҡолап төшөп илаһа ла, бахыр бисәгә эләгә. Ысын мәғәнәһендә баш ул ғаиләһендә, әммә бөтәһе лә унан ҡурҡып, ҡалтырап тора. Юҡ, бындайы ла кәрәкмәй ҡыҙыма...

Шулай ҙа...

Теләгәненде гел уйлап, күҙ алдына килтереп йөрөһәң, тормошҡа аша, ти хәҙерге психология, космоэнергетика, нейробиология тураһында яҙған китаптар. Буласаҡ кейәү тураһында хәҙерҙән уйлай башлайым әле.

Юғиһә, күршенең гел маңҡалап йөрөгән малайы менән ҡыҙым уртаҡ тел таба, уйнай. Бер көндө "Мин үҫкәс, шул малайға кейәүгә сығам" тимәһенме! Ултыра төшә яҙҙым, эстән генә "Аллам һаҡлаһын!" тинем.

Ҡыҙҙарыбыҙ маңҡалар ҡулына эләкмәһен ине инде.

**АЙБИКӘ.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Уҡыусыбыҙ бына шундай яңы рубрика тәҡдим итте. Ул рубрикалағы сығыштар ниндәйерәк булырға тейешлеген аңғарғанһығыҙҙыр: донъя, тормош, яҙмыштар, балаларыбыҙ тәрбиәһе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр... Ҡыҫҡаһы, ни тураһындағы уй тынғылыҡ бирмәй, ниндәй уйҙарҙан уйылаһығыҙ - һеҙ ҙә яҙығыҙ, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ. Хаттар көтәбеҙ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# БАШҠОРТ ЯУГИРҘӘРЕНЕҢ...

## "Халыҡтар һуғышы"нда ҡатнашҡаны

**1813 йылдың октябрь урталарында Лейпциг тип аталған бәләкәй генә Саксония ҡалаһында XIX быуаттың иң ҙур алыштарының береһе була. Был һуғыш тарихта "Халыҡтар һуғышы" исеме менән билдәле.**

Француз ғәскәрҙәре бер-бер артлы еңелеүҙәргә юлыға, ҡасандыр тиҙ арала баҫып алған ҡалалар, дәүләттәр ҡабаттан ҡулдан ысҡына. Рәсәй ерҙәрендә ҡыйратылғанынан һуң Наполеон Бонапарт донъя императоры булыу хыялынан ваз кисә, әммә әлеге Франция императоры титулын булһа ла һаҡлап ҡалырға теләй. Быуның өсөн Рәсәй, Австрия, Пруссия, Швеция ғәскәрҙәренән торған союздаш көстәрҙең үҙ-ара килешмәүсәнлеген ҡулланып, уларҙы берәмләп еңеп, Франция өсөн отошло шарттарҙа тыныслыҡ тураһында килешеү төҙөү кәрәк була.



Һуғыштың масштабы XIX быуат өсөн, ысынлап та, бик ҙур була. 330 мең кешенән торған союздаш көстәр 200 мең кешенән торған Наполеон ғәскәре менән осраша.

Австриялы Шварцберг, немец Блюхер һәм швед Бернадот етәкләгән һәм Александр I идара иткән союздаш көстәрҙең ғәскәрҙәре Лейпцигты төрлө яҡлап уратып ала.

✓ *1943 йылда Ғабдрахман Рәсүлев Сталин менән осраша. Был осрашыуҙа ил башлығы мосолмандарҙың, Үҙәк Диниә назаратының, мөфтөйҙөң фашизмға ҡаршы һуғышта ҙур ярҙам күрһәтеүенә рәхмәтен белдерә.*



*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



# ҒАБДРАХМАН РӘСҮЛЕВТЫҢ...

## Диниә назаратын һаҡлап ҡалғаны

1942 йылда Өфөлә Үҙәк Диниә назаратында Советтар Союзы мосолмандарының гәҙәттән тыш съезы үткәрелә. Унда сығыш яһағанында Ғабдрахман Рәсүлев дин ҡәрҙәштәренә түбәндәге һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итә: "Хөрмәтле мосолмандар! Аллаһы Тәғәләнең һәм уның рәсүле Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең әмере һеҙҙе үҙ көсөгөҙҙө йәлләмәйенсә һуғыш яландарында Ватаныбыҙҙы, мосолман донъяһын, бар кешелекте азат итеү өсөн фашист илбасарҙарына ҡаршы һуғышырға саҡыра. Тылда ҡалған ирҙәр һәм ҡатындар, ҡыйыуһыҙлыҡҡа һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгеҙ. Һуғышты уңышлы алып барыр өсөн кәрәкле әйберҙәр эшләү һәм халыҡты тәмин итеү өсөн бар көсөгөҙҙө һалығыҙ. Фашист Германияһына һәм уларҙың ҡуштандарына ҡаршы Ватан һуғышында үҙегеҙҙең хаҡлығығыҙҙы дәлилләп, бар донъя алдында тыуған илегеҙгә тоғролоғоғоҙҙо иҫбатлағыҙ. Мәсеттәрҙә һәм ғибәҙәт булмәләрендә Ҡыҙыл Армияның еңеүенә доға уҡығыҙ. Беҙ, Советтар Союзында йәшәгән ислам ғалимдары һәм дин әһелдәре, бар мосолмандарҙы бергәләшеп Ватаныбыҙҙы һәм барлыҡ мосолман донъяһын фашистарҙан һәм уларҙың ҡуштандарынан һаҡларға саҡырабыҙ. Бөйөк һәм Шәфәғәтле Аллаһтан дошмандың тиҙ арала еңелеүен һорайбыҙ". Мөрәжәғәт Советтар Союзының бар мосолман халыҡтары телдәренә, ғәрәп, төрөк, хинди телдәренә тәржемә ителә һәм ҙур тираждар менән таратыла. Мөрәжәғәттең ҡағыҙ варианты илдәге күпселек имамдар, мөхтәсибтәр имзаһы аҫтында "Труд" гәзитендә баҫыла. Дин әһелдәре тарафынан Бөйөк Ватан һуғышына мосолмандар өсөн изге һуғыш - йиһад статусы бирелә. Бөгөнгө көндә былар хаҡында бик аҙҙар белә. Үҙәк, уның идеологияһын булдырырға тырышҡан тарихсылар ошо тарихи ваҡиғаны ситләтеп үтә, шуға күрә лә уҡыу йорттарында уҡытылған тарихи китаптарҙа уны осратыу мөмкин түгел.

Һуғыш ваҡытында Үҙәк Диниә назараты янында булған мәсеттә (Тукай урамы) йәмәғәт менән биш ваҡыт намаҙ, йома, байрам намаҙҙары уҡыла. Йәштәр ҙә, оло-лар ҙа Аллаһ йортона әүҙем йөрөй. Мәсеткә килеүселәр араһында эргәләге хәрби госпиталдә дауаланған һалдаттар ҙа була. Йәйгеһен бында халыҡ үтә күп йыйыла. Шуға күрә ғибәҙәттәр ихатала үткәрелә.

Өфөнән алыҫ түгел бер урында "Трудармия" урынлашҡан була. Ундағы һалдаттар оборона заводында яңы цехтар төҙөү менән шөғөлләнә. Һалдаттар башлыса Урта Азиянан була, улар урыҫ телен йүнләп белмәй, туған телдәрендә һөйләшә, милли кейем кейеп йөрөйҙәр. Уларҙың йәшәү шарттары бик хөрт була. Һалдаттар Урал тауҙарының климатына ауыр яраҡлаша, йыш ауырыйҙар, үлеп ҡалыусылар ҙа күп була. Ғабдрахман Рәсүлев был турала белеп ҡалғас, шунда уҡ тейешле саралар күрә. Башҡортостан мосолмандары һалдаттарға кейем-һалым, аҙыҡ-түлек менән ярҙам итә. Мөфтөйҙөң ярҙамсыһы Мөхәммәт хәҙрәт йома һайын хәрби частҡа йөрөй. Диниә назараты һорауы буйынса был көндә һалдаттар ял итә, мунса төшөп, йома намаҙында ҡатнаша.

Үҙәк Диниә назараты зәҡәттең мотлаҡлығын иҫкәртҡән фәтүә ҡабул итә. 1943 йылда "Известие" гәзитендә баҫылған телеграммала Ғабдрахман Рәсүлев танк колоннаһы төҙөү өсөн 50 мең һум индереүен хәбәр итә һәм мосолмандарҙы ошо эшкә ҡушылырға саҡыра. Сталин уға яуап итеп, "Һеҙгә Ҡыҙыл Армияның бронетанктары хаҡындағы хәстәрлегегеҙ өсөн рәхмәтемде белдерәм", тигән хат ебәрә. 1943 йылда Ғабдрахман Рәсүлев Сталин менән осраша. Был осрашыуҙа ил башлығы мосолмандарҙың, Үҙәк Диниә назаратының, мөфтөйҙөң фашизмға ҡаршы һуғышта ҙур ярҙам күрһәтеүенә рәхмәтен белдерә, ислам динен тотоусыларҙың йолаларын башҡарыуҙа бер аҙ ташламалар яһай, ошо юҫыҡта 1945 йылда "Ислам дине" тигән китап сығарырға рөхсәт бирә. Әйткәндәй, был китап Сталиндың Указы буйынса сығарылған берҙән-бер дини китап иҫәпләнә.

Мосолмандар, большевиктар власҡа килгәндән алып дауам иткән эҙәрлекләүҙәргә ҡарамаҫтан, үҙҙәренә ҡаршы күрһәтелгән золомдо онотоп, Ватанды һаҡлауҙан ғибәрәт изге бурыстарын урынына еткереп үтәй. Бигерәк тә һуғыштың тәүге йылдарында, власть ҡаушап ҡалған осорҙа, дин әһелдәренең роле ҙур була. Улар халыҡты изге һуғышҡа әйҙәгән көскә әйләнә.

Һуғыштан һуң мосолмандарға хаж ғибәҙәте ҡылырға рөхсәт бирелеүе ҙур ваҡиға була. Оҙаҡ йылдар тыйыуҙан һуң, мосолмандар изге ерҙәргә барыу мөмкинлеге ала. Ғабдрахман Рәсүлев үҙе лә өсөнсө тапҡыр хаж ғәмәлен үтәй. Хажиҙар Төркиә аша осорға тейеш була. Ләкин төрөк властары совет иле мосафирҙарын ҡабул итергә теләмәй. Һөҙөмтәлә самолет Иран аша оса. Фарсы дәүләтенең шахы Пехлеви СССР хажиҙары хөрмәтенә ҙур тантана ойоштора. Хатта Тегеранда ҙур майҙанда фашистарға ҡаршы һуғышта шәһит булған мосолмандар хөрмәтенә йыназа намаҙы ла үткәрелә. Сәғүд Ғәрәбстанында ла уларҙы йылы ҡаршы алалар.

Революцияға тиклем булған мәҙрәсәләрҙең бөтөрөлөүе, дини кадрҙар ҡалмауы мөфтөйҙө ныҡ борсой. 1946 йылда Ғабдрахман Рәсүлев хөкүмәткә имамдар әҙерләү буйынса курс асыу мәсьәләһе буйынса мөрәжәғәт итә. 30 кешенән торған курс алмаш әҙерләүсе үҙәк буласаҡ, тип фаразлана. Ғабдрахман Рәсүлев уҡыу программаһын үҙе яҙа. Унда ислам нигеҙҙәре, мосолман йолалары, Ҡөрьән, хәҙистәр, СССР Конституцияһы буйынса дисциплиналар индерелә. Курс асыу тәҡдиме һәм ошо уҡыу программаһы менән ул Өфөләге Дини эштәр буйынса советҡа мөрәжәғәт итә. Ыңғай яуап ала алмай, Мәскәү ҙә был тәҡдимде хупламай.

Курстар ойоштороръға рөхсәт ителмәһә лә, китап сығарырға мөмкинлек тыуа. Ғабдрахман Рәсүлев әҙерләгән "Ислам" тип аталған китап һуғыштан һуң Мәскәүҙә донъя күрә. Китап ғәрәп хәрефтәре менән йыйыла. Шуға күрә лә уны оло быуын ғына уҡый ала, йәштәр ғәрәп алфавитын белмәй. Был хәлдән китапты кириллицала күсереп баҫтырып ҡына сығырға була. Закир Айыуханов исемле кешенең кәңәше буйынса, Ғабдрахман Рәсүлев был эште мосолман календарҙары йыйыусы Рәбиғә ханымға йөкмәтә. Бер нисә айҙан китаптың 28 данаһы әҙер була. Мөфтөй уларҙы урта йәштәге иң ышаныслы, лайыҡлы кешеләргә генә тапшыра.

Мөфтөй Ғабдрахман Зәйнулла улы Рәсүлев 1950 йылда вафат була.

Шулай итеп, ислам тәғлимәтен тотоусылар менән Үҙәк араһында аңлашмаусанлыҡтар тыуған ваҡыттар күп була. 18-се, 19-сы, 20-се быуатта ла, империализм, большевизм осорҙарында ла мосолман халыҡтары үҙҙәренең милли һәм дини үҙенсәлектәренә ҡаршы килгән дәүләт нормалары менән килешмәй. Шул уҡ ваҡытта был уларға Рәсәй империяһына, Советтар Союзына ҡурҡыныс янағанда уртаҡ Ватанды һаҡлап сығырға ҡамасауламай. Ғабдрахман Рәсүлев һәм шул замандағы дин әһелдәре, йәберләнеүҙәрен, эҙәрлекләнеүҙәрен, репрессияларға дусар ителеүҙәрен онотоп, дин ҡәрҙәштәрен дөйөм дошманға ҡаршы берләштерергә көс таба. Улар, Советтар Союзында ислам диненең ниндәй ауыр хәлдә икәнен белеп, мосолмандарҙы үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан немец пропагандаһына алданмай, илгә ҡаршы эстән сығыш яһаған бишенсе колоннаға әйләнмәй. Бөгөнгө көндә милли, диниара мөнәсәбәттәрҙе ҡорғанда Үҙәк ошо хаҡта ла онотмаһа ине.

**Сафуат Ғабдрахман ҡыҙы Рахманҡулованың "Мөфтөй Ғабдрахман Рәсүлев - ишан хәҙрәт Рәсүлевтың оло улы" тигән китабын файҙаланып,**

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 42-се һанда).**

Был гәскәрҙәр араһында швед принцының рус корпусы составына ҡараған Өфө йәйәүләр полкы ла була. Башҡорт һыбайлыларының полктары иһә, төрлө армияларға һәм партизан отрядтарына таратылып, мобиль көстәр сафында дошманға ташлана. "Төньяҡ амурҙары" еңел кавалерияға хас булғанса беренсе булып һуғышҡа инә һәм һуңғы булып һуғыштан сыға. Уларҙың ҡыйыулығы союздаш гәскәрҙәргә көс бирә, дошманды ҡурҡыуға һала. Өс көн дауам иткән көсөргәнешле алышта Наполеон гәскәрҙәре тар-мар ителә, бик аҙы ғына яу яланынан ҡасып ҡотола.

Ошо тарихи ваҡиға булған урында 1913 йылда яуҙа үлгән рус хәрбиҙәре иҫтәлегенә православие сиркәүе төҙөлә. Ә 2003 йылдың 19 октябрендә сиркәү янында һуғышта ҡатнашҡан башҡорт яугирҙәре иҫтәлегенә һәйкәл асыла. Һәйкәлдең авторҙары Германияла йәшәгән милләттәштәребеҙ Ирек Байышев менән режиссер Нәсүр Йөрөшбаевтар (Нәсүр Йөрөшбаев шулай уҡ "Сена йылғаһы буйында ҡурай моңо" тип аталған документаль фильм да төшөрҙө). Иҫтәлекле ташҡа башҡорт, рус һәм немец телендә "Халыҡтарҙың 1813 йылғы һуғышы. Башҡорт халҡының рус гәскәрҙәре сафында һуғышҡан яугир улдары иҫтәлегенә", тип яҙылған.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Әсе бал, нигеҙҙә, ҡышҡыһын әҙерләнгән һәм көндәлек түгел, ә туйҙарҙың төп эсемлеге булған. Умартасылыҡ менән шөғөлләнгән ерҙәрҙә был эсемлек һәр урында әҙерләнгән. Умартасылыҡ менән шөғөлләнмәгән Урал аръяғының ялан Башҡортостанында әсе балды икенсе эсемлек - буҙа алмаштырған.

Буҙаны башҡорттар арыш, арпа йәки бойҙайҙан әҙерләй. Ошо шыттырылған иген культураларын киптереп, һуңынан ҡул тирмәнендә тарттыралар. Шулай итеп алынған ҡурға һоло оно ҡушып, әсе һыу һалып ҡайнаталар һәм ике-өс көнгә әсетергә ултырталар.

XIX быуатта башҡорттар араһында киң таралған көндәлек эсемлек булып "фамильный" (бөртөклө), бик һирәк таҡта сәй торған. Сәйгә һөт һалып эскәндәр, байҙар ҡайһы бер ваҡытта лимон да һалған. Шәкәрҙе бик аҙ ҡулланғандар, йышыраҡ бал менән эскәндәр. Ҡайһы бер урындарҙа, ысын сәй булмағанлыҡтан, ярлы башҡорттар болан уты, мәтрүшкә үләненең япраҡтары һәм сәскәләрен сәй итеп файҙаланған; мәтрүшкәне дауалаусы сара итеп тә ҡулланғандар.

Еләктәр хаҡында һүҙ барғанда, иҫкә алынған ҡаҡ киң таралған десерт булып торған. Уны ялан һәм баҡса еләктәрҙән эшләгәндәр. Еләктәр иләк йәки ныҡ беше булмаған туҡыма аша һығылған. Бутҡа рәүешендәге һут алдан май йәки ҡаймаҡ менән майланған тигеҙ таҡтаға һалынған һәм ҡояшта киптерелгән. Ике-өс көндән әҙер ҡаҡты таҡтанан алғандар һәм уралған килеш таблиға биргәндәр.

Төрлө еләктәрҙән (тарттырылған йәки бөтөн килеш) эшләнгән эслек һалып бешерелгән бәлештәр һәм бөккәндәр ҙә десерт булып торған. Был ашамлыҡтар тотош Башҡортостанда билдәле булған.

Башҡорттар көнөнә өс тапҡыр туҡланған: иртәнге ашты - алты-етелә, төшкө ашты көн үҙәгендә һәм киске аш ашағандар.

### Йорт производствоһы

Ышҡыу ярҙамында ут табыу башҡорттар тарафынан XX быуат башында ла, һәр урында булмаһа ла, ҡулланылған. Бурамаға 8 сантиметр ҡалынлығында ҡоро ҡарағай таҡта ҡағыла, унан 50-60 см алыҫлыҡта ергә ҡоро ҡарағастан бағана ултыртыла. Бағана менән таҡта араһына, уларға яһалған бәләкәй уйымдарға диаметры 6 сантиметр булған, ике яҡ осо матур итеп осланған ҡоро имән таяҡ - урғалаҡ урынлаштырыла. (91, 92-се һүрәт). Бағананың үргә осон бурамаға ныҡ итеп тарттырып, урғалаҡты бағана менән таҡта араһында ҡыҫалар. Уны ике тапҡыр арҡан менән урағас, ике яҡтан дүртәр кеше арҡанды тартып, урғалаҡты әйләндерә. Ағасты имән орсоҡ менән шулай итеп бырауулау осҡон сыҡҡанға тиклем дауам итә. Утты шунда уҡ ҡауға алалар.

✓ *Ауылда мәктәп ябылһа, ул ауылдың киләсәге юҡ. Хатта эшләрлек эш, хеҙмәт урындары булған осраҡта ла, үҙ балаһының киләсәген уйлаған йәштәр ул ауылда тороп ҡалмаясаҡ.*



# ӘГӘР МИН

## быны кем

**Милләтебеҙҙең күренекле улы, дәүләт эшмәкәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары, "Башҡортостан урман етештереү компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең күҙәтеүсе директорҙар советы рәйесе һәм күптән түгел генә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты булып һайланған Хәләф Хәлфетдин улы ИШМОРАТОВ хаҡында беҙ күпте беләбеҙ кеүек. Эйе, ул һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендәге кеше. Әммә барыбер ҙә быға тиклем беҙҙең аралашыуҙар, асылда, рәсми урындарҙа, рәсми тонда барҙы. Ә бына был юлы беҙ уның менән ҡаршы ултырып, асыҡтан-асыҡ әңгәмә ҡорабыҙ. Уның хәтирәләре, әлбиттә, бала сағынан, тыуған яғынан башланды.**

### Атай мәктәбе

Мин Бөрйән районының төпкөл ауылдарының береһе Яңы Усманда тыуып үҫтем. Беҙҙең фамилия башында тороусы бөрйән ырыуы вәкиле Ишморат олатай 1814 йылда элекке Тарыуал, хәҙерге Әтек ауылынан бүленеп сығып, әлеге ауылыбыҙ урынында нигеҙ ҡороп, шунан беҙҙең ауыл барлыҡҡа килә. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Олатайым менән өләсәйем һуғыш йылдарында мәрхүм була, шуға күрә туғандар, етемлекте тоймаһын типтер инде, һуғыштан ҡайтыу менән атайыма күрше ауылдан ун алты йәшлек әсәйемде димләп алып бирә.

Атайым менән әсәйем татыу йәшәне, һигеҙ балаға ғүмер бирҙе. Алтауыбыҙға юғары белем алырға ярҙам иттеләр. Заманына күрә ғаиләбеҙҙең матди хәле ауыр булһа ла, улар беҙҙең белемгә ынтылышты һүрелдермәне, киреһенсә, был ынтылышты хуплап ҡына торҙо. Бер йылды хатта беҙ бер өйҙән дүрт студент булып киттек. Дүрт студентты укытыуҙың ни икәнен ауылда йәшәгән кеше үҙе генә белә. Улар урам тултырып мал көттө, әсәйебеҙ шәл бәйләп һатты һәм хәләл көсө менән килгән аҡсаға беҙҙе укытып сығарҙылар.

Атайым һуғыштан ҡайтҡас, ауыл советы рәйесе булып эшләй. Аҙаҡ ер барыбер үҙенә тарттымы, механизатор булып хеҙмәт итте. Ғүмеренең һуңғы йылдарында инвалидлыҡ алғас, мал ҡараны. Беҙ бәләкәйҙән уның менән бергә көтөү ҙә көттөк, тракторҙа ла, комбайнда ла эшләнек. Атайыбыҙ беҙҙе һәр ваҡыт үҙе менән бергә эшкә йөрөттө. Уға ҡарап, беҙ эшкә өйрәндек, бесән дә саптыҡ, салғы ла сүкенек, күбә лә тарттырҙыҡ, кәбән дә һалдыҡ, тырмала ла йөрөнөк. Беҙ бер-беребеҙгә терәк булырға, ярҙам итешергә лә атайыбыҙҙан өйрәндек. Ауылдаштар ниндәйҙер документ, ғариза, ышаныс ҡағыҙы, аңлатма яҙырға кәрәк булһа, атайыма килә торғайны. Сөнки ул русса ла, хатта украинса ла яҡшы белде. Ауылда тәрлө йыйылыштар булһа, уны мотлаҡ рәйестә йыйылыштың рәйесе итеп һайлап ҡуя инеләр. Атайыбыҙ ғәҙел кеше булды, бер ваҡытта ла һүгенмәне, тәмәке тартманы. Үҙе һәр ваҡыт китаптар, гәзит-журналдар уҡый торғайны. Мин хәреф танырға "Әлифба"нан түгел, гәзиттәге хәрефтәрҙән өйрәндем. Шуға күрә дүрт йәшемдә уҡый белә инем инде. Урамда китеп барһам, өлкәндәр һөйләшеп торһа, яндарына саҡырып алып, ҡулдарындағы гәзиттәрҙе ҡысҡырып укытып, ниңәлер, тәгәрәп ятып көлә торғайнылар. Шулай бәләкәй көйөмә уҡый белгәнем өсөн мәрәкә иткәндәрҙер, күрәһең. Шунан улар минә 10-15 тин аҡса бирәләр, мин магазинға барып, печенье һатып алам. Йәнәһе, эшләп ашайым. Ҡыҫҡаһы, мин дүрт йәшемдән эшләп ашай башлағанмын була инде.

Ауылда ул ваҡытта дүрт йыллыҡ ҡына мәктәп ине, шуға минә интернат мәктәбендә уҡырға тура килде. Мәктәпкә алты йәштән барҙым, һәр ваҡыт үҙемдән өлкәндәр менән уҡыным. Дүртенсене тамамлағанда минә ун ғына йәш ине. Артабан район үҙәгенә интернатҡа барырға булғас, әсәйем, йәлләп, мине бер йылға тағы ла ауылда ҡалып, тағы бер тапҡыр дүртенсе класҡа барырға өгөтләне. Бер аҙнаға түҙҙем дә, берәүгә лә әндәшеп тормай, Фәниә апайым менән өйҙән ҡасып сығып киттек. Район үҙәгенә барып, интернатҡа урынлаштым да, уҡырға керештем. Бер аҙна үткәс, әсәйем мине килеп тапты, тик мин яңы мәктәптә ныҡлап арҡа терәгәйнем инде. Урта мәктәпте 2-се һанлы Ишембай интернат-мәктәбендә тамамлап, артабан Башҡортостан ауыл хужалығы институтына уҡырға индем.

Өс йыл элек бер туған ағайым менән тыуған ауылыбыҙҙа мәсет төҙөнөк һәм ул мәсеткә атайыбыҙҙың исемен бирҙек. "Хәлфетдин мәсете" тип атала хәҙер ауылыбыҙҙың Алла йорто. Хәлфетдин исеме ғәрәпсәнән "дингә әйҙәүсе" тигән мәғәнәне аңлата. Мәсеттең алдына Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар хөрмәтенә обелиск ҡуйҙыҡ. Беҙҙең ауылдан 37 кеше фронтҡа китеп, шуларҙың 23-ө яу ялаһында ятып ҡалған. Мәсеткә намаҙға килеүселәр обелискта яҙылған исем-фамилияларҙы уҡып, уларҙы иҫкә төшөрөп, әруахтарға аят уҡый.

### Комсомол мәктәбе

Ауыл хужалығы институтын тамамлағас, Баймаҡ районында Йылайыр совхоз-техникумында уҡыта башланым. Ул саҡта ин йәш студенттарым - минең тиңдәштәрем, ә иң өлкәндәре 1949 йылғылар ине. Уҡытыу эше минә шул тиклем оҡшаны, хатта "Минә педагог булырға кәрәк булған бит", тип тә уйлап ҡуйғайным. Әммә күп тә үтмәне, Баймаҡ район комсомол комитетының беренсе секретары Сынбулатов саҡырыуы буйынса уның ҡул аҫтында икенсе секретарь булып эшләй башланым. Аҙаҡ беренсе секретарь булдым. Шунан Баймаҡҡа тулыһынса ерегеп эшләп йөрөгәндә Башҡортостан комсомолының Өлкә комитетынан тәҡдим булды. Тәүҙә бүлек мөдире, шунан секретарь булдым.

Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә, республикабыҙҙа кемдәр ныҡлы, төплө итеп эшләй, уларҙың барыһы ла комсомол мәктәбен үтеүселәр. Комсомол мәктәбе бына тигән кадрҙар әҙерләү мәктәбе булды. Беренсенән, ул йәш кешелә лидерлыҡ, икенсенән, йәмғиәткә хеҙмәт итеү тойғоһо тәрбиәләне. Унда төп принцип шундай булды: "Әгәр ҙә мин эшләмәһәм, кем эшләр һуң?" Шуға күрә, донъялар үҙгәргәндән һуң комсомол мәктәбен үткән егеттәр һәм ҡыҙҙар береһе лә юғалып ҡалманы, кемеһе бизнеста, кемеһе идаралыҡта, кемеһе ҡайҙа, үҙ урынын тапты.

Хәҙер комсомолдан һуң барлыҡҡа килгән йәштәр ойошмалары күп, тик улар комсомол кимәленә күтәрелеп етә алмай барыбер. Комсомол барыбер ҙә кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте, коллективлыҡ тойғоһон нығыта торғайны. Иң беренсе сиратта был мәктәп йәш кешелә яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә булышлыҡ итте. Был мәктәп "Беҙ - илдең киләсәге" тигән хис-тойғоно ҡанға ныҡ һеңдерҙе. Беҙҙең быуын бер аягыбыҙ менән совет осоронда тороп ҡалдыҡ, икенсе аяғыбыҙ менән хәҙерге йәшәү шарттарына баҫтыҡ. Тәүгеһендә ныҡлап аяҡҡа ла баҫып өлгөрмәнек, икенсеһенә оҙаҡ күнектек. Әммә беҙҙең быуын барыбер был үҙгәрештә юҡҡа сыҡманы, һаман да ике замандың тоташтырып йәшәй, хеҙмәт итә, теге замандың ыңғай күренештәрен быныһына күсерә, шул уҡ ваҡытта хәҙерге заманға ла өйрәнә. Әммә беҙҙең быуын киткәндән һуң нисек булыр, бына быныһы инде ҙур проблема.

### Дәүләт мәктәбе

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә эшләгән осорҙо мин үҙ ғүмеремдең иң һөҙөмтәле йылдары тип атар инем. Әлбиттә, ул ваҡытта бер ниндәй ҙә әҙер рецептар булманы. Мәҙәниәт министры булып эшләй башлағас, Мәскәүҙең битарафлыҡ мөнәсәбәте менән күҙмә-күҙ осраштым. РФ-ның мәҙәниәт министрына барып, улар менән эш тураһында һөйләшергә теләгәйнем, ул: "Һеҙ бит хәҙер айырым ил, айырым республика, барыһын да үҙегеҙ хәл итегеҙ", - тине. Өҫтән даими рәүештә төртөп, сүкеп тороусы булмауы, бер яҡтан, һәйбәт ине, икенсе яҡтан, уларҙың битарафлығы ныҡ аптыратты. Шунан һуң беҙ барлыҡ фантазиябыҙҙы егеп, эшләп алып киттек. Бер-бер артлы Сибайҙа, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта филармониялар астыҡ, бик күп һандағы яңы театрҙар, шул иҫәптән Сибайҙа "Сулпан" театры барлыҡҡа килде. Сибайҙа -Өфө сәнғәт училищеһы филиалы, тағы ла бик күп һандағы лицейҙар филиалдары асылды. Артабан республика, Рәсәй һәм донъя кимәлендә саралар үткәрә башланыҡ. Мәҫәләне, Нефтекамала - "Дуҫлыҡ моно", Сибайҙа - "Ирәндек моңо" конкурстары, "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивале. Төрки телле дәүләттәр менән бәйләнештәрҙе киңәйтеп ебәрҙек. Шул саҡта "ТӨРКСОЙ"ға тулы хоҡуҡлы ағза булып индек. Беҙҙең артистар, Мәскәүҙе уратып үтеп, туранан-тура төрлө-төрлө халыҡ-ара конкурстарға, фестивалдарға барып, лауреат булып, Башҡортостандың барлығын донъяға таныта башланы.

Ул йылдарҙа беҙ сәнғәт өлкәһендә йылдам аҙымдар менән алға барҙыҡ. Бер йылда ун йыллыҡ эштәрҙе башҡара торғайныҡ. Хәҙер бына шул йылдарҙа өлгәшелгәнде юғалтмаҫҡа ине.

Шул йылдарҙа беҙ үҙебеҙҙә ЮНЕСКО-ның комитетын төҙөп, Башҡортостанды халыҡ-ара кимәлгә сығарҙыҡ. Республикала Европа Советы менән берлектә төрлө саралар үтте. 2001 йылда Рәсәйҙең бөтә төбәктәренең мәҙәниәт министрҙарын йыйып, Өфөлә РФ мәҙәниәт министрлығының координация советын үткәрҙек. Саралар өс көн барҙы, килеүселәр мәҙәниәт усаҡтарын ҡараны, театрҙарҙа, концерттарҙа булды. Аэропортҡа оҙатырға китеп барғанда РФ мәҙәниәт министры Михаил Швыдкойҙың минә: "Минә бик ауыр бурыс йөкмәттең. Беҙ быға тиклем бындай кәнәшмәләрҙе ҡайҙа мәҙәниәт юғары кимәлдә, шунда үткәрергә тырыштыҡ. Башҡортостандан һуң уларҙы беҙгә ҡайҙа үткәрергә була һуң, тип аптырайым. Һеҙҙән дә яҡшыраҡ итеп тағы ла кем ойоштора алыр икән?" - тиеүе беҙҙең хеҙмәткә ҙур баһа булды.

### Айырым шәхестәр мәктәбе

Хеҙмәт юлымды башлағанда миңә Милләт Хәкимовтың йоғонтоһо көслө булды. Ул бөтөн яҡтан да үҫешкән шәхес ине. Ул агрономия буйынса конференция үткәргәндә - агроном-ғалимға, малсылыҡ буйынса кәнәшмә үткәргәндә - дипломлы зоотехникҡа әйләнер ине. Районда ниндәйҙер мәҙәни сара, концерттар, һабантуй үтә икән, ул ысын мәғәнәһендәге талантлы режиссер һымаҡ тота ине үҙен. Милләт Ташбулат улы механизатор менән механизатор телендә, малсы менән малсы, ғалим менән ғилми телдә һөйләшә торған ҙур етәксе-шәхес ине. Ул республикабыҙға, халҡыбыҙға тағы ла күп йылдар хеҙмәт итергә тейеш ине. Иртә китеп барҙы, шуныһы бик йәл.

Шулай уҡ Баймаҡ еренең данлыҡлы улы, оҙаҡ йылдар төрлө кимәлдәге етәксе вазифаларын башҡарыусы Әкрәм Ниғмәтуллин да прогрессив ҡарашлы кеше булараҡ хәтерҙә ҡалды, уның бирғән һабаҡтары ла байтаҡ булды. Комсомолға эшкә килгәс, Сергей Епифанцев, дәүләт органдарында эшләгәндә Михаил Швыдкой, "ТӨРКСОЙ"ҙың ул саҡтағы етәксеһе, Әзербайжандың мәҙәниәт министры Полад Бюль-Бюль оглы һәм башҡа бик күптәрҙе үҙ тормош юлымда яҡты эҙ ҡалдырған шәхестәр мәктәбе исемлегенә индерергә мөмкин булыр ине. Ул йылдарҙағы рухи мәҙәни өлкәлә өлгәшкән уңыштарыбыҙҙа, һис һүҙһеҙ, Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың роле баһалап бөткөһөҙ булды.

### Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе...

Әлбиттә, заман шарттарына ҡарап, оптималләштереү ҙә кәрәктер, әммә ауылда мәктәп ябылһа, ул ауылдың киләсәге юҡ. Хатта эшләрлек эш, хеҙмәт урындары булған осраҡта ла, үҙ балаһының киләсәген уйлаған йәштәр ул ауылда тороп ҡалмаясаҡ. Бөгөн республикабыҙ халҡының 40 проценты ауылда йәшәй. Ә ауылда йәшәүселәрҙең милли составын билдәләгәндә, беҙҙең милләттең 55 проценты ауылда йәшәй. Әгәр ҙә беҙ, Хрущев ваҡытындағы кеүек, перспективаһыҙ ауылдар принцибы буйынса эш итһәк, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сабасаҡбыҙ. Әлбиттә, беҙҙең халыҡ йәшәгән ауылдарҙа колхоз-совхоздарҙың бөтөүе бик ныҡ бәкәлгә һуҡты. Ә бит күнбайыш районлар ауылдарҙағы күмәк хужалыҡтарҙы һаҡлап ҡала алды.

Унда һәр кем үҙенә тейешле ер пайының ҡайҙа икәнлеген белә, пайы өсөн игенен дә, һаламын да ала. Хужалыҡ һаҡланып ҡалғас, улар дәүләттән льготалы субсидия, дотация ла алыуға өлгәшә. Ә башҡорттар күпләп йәшәгән районлар хакимиәт башлыҡтарының, колхоз-совхоздар етәкселәренең перспективаны күрә белмәүҙәре арҡаһында хужалыҡтар тарҡалды. Хужалыҡ эшләмәгәс, дотация ла, субсидия ла алынмай. Күп халыҡ хәҙер ситкә китеп эшләргә мәжбүр.

Эйе, революцияға тиклем колхоз-совхоздар ҙа, субсидиялар ҙа булмаған, әммә һәр ваҡыт ер һөрөлгән, сәселгән. Етмеш йыл йәшәү дәүерендә халыҡтың күңелендәге "Мин үҙ еремә үҙем хужа, үҙемдән башҡа минең ғаиләмде, балаларымды берәү ҙә ҡарамаясаҡ", тигән хужа булыу тойғоһо үлтерелде. Мәле еткәс, беҙ революцияға тиклем хужалыҡ мөнәсәбәттәре нисек булған, шуға барыбер ҙә кире ҡайтасаҡбыҙ ул. Әммә быны өсөн ваҡыт кәрәк. Ниндәйҙер реформалар, заман үҙгәрештәренә ҡулайлашыу кәрәк. Үҙемдең тыуған ауылым миҫалынан сығып, шуны әйтәм: кемдәр ябай малсы, ябай механизатор булып эшләгән, шулар йәл. Ә кемдең хужалыҡ итеү ҡомары тыуымыштан булған, улар үҙ юлын үҙе тапты. Ә ҡайһы бер кешеләрҙе бит тик фарман биреп кенә эшләтергә мөмкин. Улар эшкә әрһеҙ, аҙ ғына эш хаҡына булһа ла, эшен намыҫ менән башҡара. Уларҙың күбеһе хәҙер эшһеҙлектән, аҡсаһыҙлыҡтан эскелеккә бирелде. Ауылдағы зыяратҡа инеп, ҡәбер таштарын-

***✓ Беҙҙең 2019 йылға тиклем ике инвестиция проектыбыҙ бар, 2029 йылға тиклем тағы ла бер проект буласаҡ. Беҙҙең компания республикала теркәлгән һәм киләсәктә лә республикала эшләргә тигән уй менән йәшәй.***

дағы мәрхүмдәрҙең тыуған йылдарын ҡараһаң, йөрәк әрней. Һуңғы ваҡыт ҡайһы берәүҙәр кемдер килеп эшкә ҡушыр, колхоз төҙөп бирер, тип көтөүҙән төңөлөп, яйлап эш башланы ул. Был - шатлыҡлы күренеш, әлбиттә. Әммә күпселек тулыһынса аңлап еткәнсе, күпме ваҡыт үтере билдәһеҙ әле.

Тағы ла бер күренеш: совет осоронда колхоз булған ауылда йәшәгән кешеләрҙә "Был ер, мөлкәт минеке" тигән тойғо барыбер һаҡланып ҡалған. Ә бына Урал аръяғы райондарында совет осоронда совхоздарҙың күп булыуы һәм уларға төрлө милләт кешеләренең күпләп килеп тулыуы урындағы халыҡта, дөрөҫөн әйткәндә, пофигизм тойғоһо тыуҙырҙы. Улар тик дәүләтте һауып ҡына йәшәргә өйрәнде, "минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе" тигән принцип буйынса эшләне. Элек совхоз булған ауылдарҙа хәҙер ҡот оҫҡос хәлдәр күҙәтелә, ә колхоздар булған ауылдарҙа, алда әйткәнемсә, өмөт бар әле. Бөгөн Урал аръяғында "Красная Башкирия"нан тыш, бер йүнле совхозды телгә алып булмай. Унда элекке Әбйәлил районы комсомолының секретары Раил Фәхрисламов (әлеге лә

# ЭШЛӘМӘҺӘМ... эшләр һуң?

баяғы комсомол мәктәбе) директор булып эшләй. Бына унының кеүек тағы ла 4-5 булдыҡлы егет булғанда, Урал аръяғы күтәрелер ине.

Ошо көндәрҙә мин Күгәрсен, Йылайыр һәм Ейәнсура райондарынан Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайына депутат булып үттем. Ошо райондарҙағы ҡайһы бер ауылдарҙа халҡыбыҙҙың эшҡыуарлыҡ һәм ер менән эшләүҙең төрлө ысулдарын таба белгән кешеләре менән осрашыу күңелемдә өмөт уятты. Әлбиттә, бөгөн ауыл халҡы өсөн бик ҡатмарлы заман. Ә шулай ҙа ҡаһарман шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең беҙҙең халыҡты аҡтамыр менән сағыштырған һүҙенә инанам. Халҡыбыҙ ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, уларҙы еңеп сығып, барыбер өҫкә ҡалҡып сығасаҡ. Алдағы бер нисә йыл эсендә халҡыбыҙ ер менән эшләүҙең ниндәйҙер бер алгоритмын табып алып, киләсәктә үҫеш юлына баҫырына иманым камил. Мөмкинселектән файҙаланып, миңә ышаныс күрһәткәндәре өсөн Күгәрсен, Йылайыр һәм Ейәнсура райондары һайлаусыларына рәхмәтемде белдерәм. Осрашыу ваҡытында ниндәй наказдар биргәндәр, киләсәктә шуларҙы үтәү өҫтөндә ең һыҙғанып эшләргә ниәтем. Шул уҡ ваҡытта халыҡ депутатҡа уңға-һулға бүләк таратып йөрөүсе Ҡыш бабайға ҡараған һымаҡ ҡарарға тейеш түгелдер. Урындарҙа халҡыбыҙ вәкилдәре үҙҙәре тырышып, ынтылып торһа, ә беҙ республика кимәлендә уларға ярҙам күрһәтеп торһаҡ, уңышҡа ирешеп буласаҡ.

## Ситтәгеләрҙе ситләтмәйек

Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар ситтә йәшәгән башҡорттар менән сағыштырғанда "теплица" шарттарында йәшәгән һымаҡ тойола. Ә ситтә йәшәүселәр нимәгәлер өлгәшер өсөн башта башҡалар алдында үҙ-үҙен раҫларға тейеш. Башҡа телдәр, мәҙәниәттәр мөхитендә үҙ асылын һаҡлап ҡалыр өсөн уларға күпме көс сарыф итергә тура килә. Ҡорған өлкәһенә беренсе тапҡыр барған ваҡытта уларға һоҡланып ҡарап ултырҙым. Тормоштары ауыр булһа ла, үҙҙәрен һаҡлап ҡалды ул төбәктәге башҡорттар. Уларҙың үҙҙәренә генә хас һөйләше һаҡланған. Мин унда Башҡортостанда күрмәгән башҡорт милли ризыҡтарын ауыҙ иттем. Беҙ милли кейемде бер иш итеп күмәртәләп тектерәбеҙ, ә улар һәр ҡайһыһы үҙ кейемен үҙ ҡулдары менән тегеп, ул кейемде ҡомартҡы итеп һаҡлай, байрамдарға кейеп сыға. Һуңғы йылдарҙа сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең, бигерәк тә Силәбе өлкәһе башҡорттарының, донъя спорты кимәлендә дан яулауы ла ҡыуаныслы. Ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ беҙгә өмөт менән ҡарай, шуға күрә уларҙың был тойғоһон һүндерергә тейеш түгелбеҙ.

Хәҙерге ваҡытта донъяның 40-тан ашыу төбәгендә башҡорт ҡоролтайҙары комитеттары бар. Мин Ташкентта эшләүсе башҡорт ҡоролтайының юбилейына барып ҡайттым. Унда Илшат Хәсәнов атлы милләттәшебеҙ эшен бик матур алып бара. Улар Үзбәкстанда йәшәүсе барлыҡ башҡорттарҙың көндәлек проблемаларын хәл итеп йәшәргә өйрәнгән. Үзбәкстанда 30-40 мең самаһы башҡорт кешеһе бар.



**_Комсомол мәктәбе бына тигән кадрҙар әҙерләү мәктәбе булды. Беренсенән, ул йәш кешелә лидерлыҡ, икенсенән, йәмғиәткә хеҙмәт итеү тойғоһо тәрбиәләне. Унда төп принцип шундай булды: "Әгәр ҙә мин эшләмәһәм, кем эшләр һуң?" Шуға күрә, донъялар үҙгәргәндән һуң комсомол мәктәбен үткән егеттәр һәм ҡыҙҙар береһе лә юғалып ҡалманы, кемеһе бизнеста, кемеһе идаралыҡта, кемеһе ҡайҙа, үҙ урынын тапты._**

Уларҙың күптәре, әлбиттә, Башҡортостанға ҡайтырға теләй, аҡса туплай, әммә фатирҙары бик ҡиммәт... осһоҙ һәм бында ҡайтып, фатир һатып алырға етмәй. Йәштәр араһында республикаға ҡайтып бында белем алғыһы килгәндәр күп. Элек беҙ ундайҙар өсөн хөкүмәт ҡарары менән квоталар эшләй торғайныҡ. Ғинуар айында федераль агентлыҡ янындағы "Россотрудничество" етәксеһе Косачев менән Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов килешеү төҙөнө. Килешеүгә таянып, беҙ "Россотрудничество" аша квоталар алырға тейеш инек. Әммә БР Мәғариф министрлығына был хаҡта бер нисә тапҡыр әйтһәк тә, мәсьәлә хәл ителмәне. Беҙгә үҙе теләп сит илдән республикабыҙға ҡайтырға теләүселәргә ярҙам итеү буйынса республика программаһы кәрәк. Әгәр ҙә мәсьәлә дәүләт кимәлендә хәл ителмәһә, бер нисек тә хәл ителмәйәсәк.

Тағы бер проблема. Глобаллашеү шарттарына урбанизация йылдамлығы хас. Көнбайыш дәүләттәрҙә ауылда йәшәүселәр дөйөм халыҡтың 10-15 процентын ғына тәшкил итә. Беҙҙә әле 40 процент халыҡ ауылда йәшәй. Әлбиттә, алдағы йылдарҙа ауылда йәшәүселәрҙең һаны кәмейәсәк. Йәштәр хәҙер ауылдарҙа эш булмау сәбәпле һәм балаларының киләсәген уйлап, күпләп ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә урынлашырға тырыша. Хәҙер ниндәй генә район үҙәгенә барма, унда яңы урамдар ҡалҡып сыҡҡан, был хәл шулай дауам итәсәк тә. Шуға күрә хәҙер Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, киң йәмәғәтселек балаларға туған телен, халҡыбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәтеү буйынса рухиәт акцентын район үҙәктәренә һәм ҡалаларға йүнәлтергә тейеш. Сөнки район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа тәрбиәләнгән йәштәрҙең рухи кимәлен беләбеҙ. Элекке хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн был эшкә хәҙер үк тотоноу зарур.

## Берҙе ҡырҡһаң - унды ултырт…

Урман - Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән байлығыбыҙ. Республикабыҙҙың 40 проценттан ашыу территорияһын урман биләй. Әммә урманды дөрөҫ файҙаланыу зарур. Дөрөҫ файҙаланмаһаң, ағас кеше кеүек үҫә, олоғая, эсе ҡыуышлана, серей башлай, аҙаҡ кибеп йығыла. Урманды был хәлгә алып барып еткерергә ярамай, уның мәнфәғәтен күрергә кәрәк. Яңы "Урман кодексы" буйынса урманды ҡырҡыусы диләнкәһен таҙартып, үҙе ағас ултыртып китергә тейеш. Беҙ эште шулай алып барабыҙ. Тик ағасты ваҡытында ҡырҡып торорға кәрәк, ҡырҡмаһаң, уның файҙаһы булмай. Французлар ағасты ҡырҡып, ултыртып, ошо рәүешле 8 быуын ағасты файҙаланған. Беҙ хатта тәбиғәт тарафынан бирелгәнен дә файҙаланып өлгөрмәйбеҙ. Ағас өлгөрһөн өсөн кәмендә 70 йыл ваҡыт кәрәк, был бер кеше ғүмеренә тиң.

Тап шуның өсөн дә "Урманды ҡырҡалар, бөтөрәләр" тип ҡысҡырып ултырыуҙан фәтеүә юҡ. Беҙҙә күпселек урмандар тау-таш араһында, үтеп булмаҫлыҡ шырлыҡ ерҙәрҙә. Әгәр унда юл һалһаң, ағастың үҙкимммәте ныҡ артып китә. "Ағасты бүрәнә килеш ситкә сығарыу - енәйәт!" тигәйне Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов. Килешәм. Йәй көнө Хәйбуллаға барғанда иғтибар иттем: Иранан алып Юлдыбайға тиклемге юлда һәр икенсе бүрәнә тейәгән машина Ырымбур өлкәһе номеры менән ине. Ағас бер туҡтауһыҙ ошо рәүешле ситкә сығыуын дауам итә.

Ә беҙҙең холдинг икенсе төрлө йүнәлештә эшләй. Беҙ ағасты тулыһынса үҙебеҙ эшкәртәбеҙ. Беҙҙең компания республикала инвестицияны 3,5 миллиард һумға еткерҙе. Яңыраҡ Хөкүмәтебеҙ беҙҙең Белорет районы базаһындағы инвестиция проектын раҫланы. Икенсе проект - Өфө фанера комбинатында. Ағасты тулыһынса эшкәртеү маҡсатында беҙ яғыулыҡ брикеттары эшләй башланыҡ. Күмер яндырабыҙ, активированный күмер эшләйбеҙ. Французлар үҙ технологияһы буйынса ағасты 100 проценты менән эшкәртә. Улар ағастың хатта япрағын да, тамырын да файҙалана. Беҙ әлегә ағастың 70-80 процентын эшкәртеүгә өлгәштек. Киләсәктә 100 процентҡа етеүҙе күҙ уңында тотабыҙ.

Әгәр ҙә беҙ ағасты тулыһынса үҙебеҙҙә эшкәртһәк, беренсенән, үҙебеҙҙең халыҡҡа эш урындары барлыҡҡа килә, икенсенән, һалымдар үҙебеҙҙә тороп ҡала. Беҙҙең холдинг былтыр бюджетҡа 563 миллион һум аҡса күсерҙе. Беҙҙә 4 мең ярымдан ашыу кеше эшләй, дөйөм инвестицияны 10 миллиардҡа еткерергә уйлайбыҙ. Башҡортостан Президенты республика иҡтисадын күтәреү өсөн инвесторҙар йәлеп итеү мәсьәләһен йыш күтәрә. Бына беҙҙең холдинг ысын мәғәнәһендә инвестиция менән шөғөлләнә. Беҙҙең 2019 йылға тиклем ике инвестиция проектыбыҙ бар, 2029 йылға тиклем тағы ла бер проект буласаҡ. Беҙҙең компания республикала теркәлгән һәм киләсәктә лә республикала эшләргә тигән уй менән йәшәй.

Алдағы йылдарҙа Кананикольскиҙа производство асырға уйлайбыҙ. Күгәрсен районында ла тара эшләү буйынса цех асырға уйыбыҙ бар. Киләсәктә Кананикольскиҙан Мораҡҡа тура юл төҙөү мәсьәләһе өҫтөндә эшләйбеҙ. Проектты республика Президенты хупланы, ыңғай баһа бирҙе. Был мәсьәлә хәл ителһә, Ҡананан Мораҡҡа тиклемге юл 120 саҡрымға ҡыҫҡарасаҡ, тигән һүҙ. Был юл урман зонаһында йәшәгән ауылдарҙың социаль-иҡтисади хәленә ыңғай йоғонто яһаясаҡ.

## Ауыл хужалығы хаҡында бер кәлимә

Рәсәй Бөтә донъя тауар ойошмаһына инде һәм алдағы йылдарҙа беҙҙең илдә етештерелгән продукцияға конкуренция ныҡ артасаҡ. Был, әлбиттә, ауыл хужалығы киләсәгенә ҙур йоғонто яһаясаҡ. "Аргументы и факты" гәзитендә яҙылыуынса, Рәсәй хөкүмәте ауыл хужалығына ярҙам итеү өсөн быйыл 300 миллиард һум аҡса бүлергә тейеш булһа ла, ни бары 100 миллиард ҡына аҡса бүлгән. Ошондай шарттарҙа сит илдәрҙән осһоҙ ауыл хужалығы продукцияһы килеп тулһа, беҙ етештергән тауар баҙарҙан ҡыҫырыҡлап сығарыласаҡ. Өфөләге ит комбинаттарының сеймалды ҡайҙан алыуҙары хаҡында ҡыҙыҡһынғайным. Баҡтиһәң, улар итте Аргентинанан һәм Бразилиянан ала икән. Был илдәрҙә йыл әйләнәһенә йәй һәм уларҙа етештерелгән иттең үҙкиммәте беҙҙекенә ҡарағанда 2-3 тапҡырға осһоҙораҡ. Улар тауарын океан аша алып килһә лә, хаҡтары үҙгәрешһеҙ ҡала.

ВТО шарттары буйынса, еренә фәҡәт экологик паспорты булған хужалыҡтар ғына баҙарға аҙыҡ-түлеген сығара ала. Беҙҙә әле ундай паспорттар бөтөнләй эшләнмәгән тиерлек. Шулай булғас, беҙ хатта сифат яғынан юғары булған тауарыбыҙҙы ла донъя баҙарына сығарыу ғына түгел, үҙебеҙҙә лә һата алмаясаҡбыҙ. Ә бит тупраҡтың химик составы тикшерелеп, бындай паспорттар әллә ҡасан уҡ әҙер булырға тейеш ине. Осрашыуҙар ваҡытында шуға ла инандым: Бөтә донъя тауар ойошмаһына илебеҙ бөтөнләй әҙерлекһеҙ инә һәм хужалыҡтарға бер ниндәй ҙә тәкдимдәр булмаған. Бөгөн беҙ "аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге" тигән төшөнсәгә бөтөнләй иғтибар бирмәйбеҙ. Был төшөнсә һәр бер илдең иң төп мәсьәләләренең береһе булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ана шундай уйҙар һәм ғәмдәр менән йәшәй Хәләф Хәлфетдин улы. Бары үҙ халҡының ғәме менән йәшәүсе кеше үҙ иленең иртәгәһе хаҡында ҡайғырта ала. Был - аксиома.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ *Һирәк-һаяҡ осраҡлы ғына күренеп ҡалған муйыл күҙле был ҡыҙҙың үҙенә һәр саҡ иғтибар иткән сырайын тағы күҙ алдына килтерҙе. Әммә уйҙары уны яңынан әлеге "үҙенең тиңе булмаған мәк сәскәһе"нә алып килде.*



Бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, көндәрҙән бер көндө гөлдәй Гөлгөнә уға үҙе килде. Йәйге сессия тамамланғас, университеттағы эше буйына ялға сыҡҡан Сабит Хәкимович, дауаханалағы төп эш көнөнән һуң ҡайтырға йыйынып, тышҡа сыҡты. Сабиттың еүеш асфальт төҫөндәге "десятка"-һының янында көтөп тора ине уны һылыуҡай.

- Һаумыһығыҙ, Сабит Хәкимович, - тине ҡыҙ йылмайып.

- Һеҙ - минәме?.. - тип һораны көтөлмәгән осрашыуҙан бер аҙ албырғап ҡалған егет ҡыҙара биреп.

- Мин һеҙҙе бер сәғәт көтәм инде, - тине Гөлгөнә.

-Берәй йомошоғоҙ бар инеме әллә?.. - тине Сабит кеҫәһенән асҡыс бәйләмен сығара-сығара. Асҡыстарға тағылған "пульт"ы менән тиҙ генә машинаһын асты. - Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ, бер юлы өйөгөҙгә лә илтеп ҡуйырмын.

- Юҡ, рәхмәт, - тине ҡыҙ йәнәшәлә торған асыҡ ҡыҙыл төҫтәге "Део-Матис" автомобиленә күрһәтеп, - мин үҙем рулдә.

- Улайһа, йомошоғоҙҙо әйтегеҙ, - тине Сабит.

- Иртәгә шәмбе көн буш булаһығыҙмы?

-Иртәгә?.. - егет бер-ике секунд уйланып алды. - Төштән һуң бушмын.

-Иртәгә минең тыуған көнөм, Сабит Хәкимович. Килә алмаҫһығыҙмы?..

Ҡатмарлы бер йөкләмә алған студенттай, егет тағы ла бер аҙ ҡаушай төштө, әммә үҙен-үҙе тиҙ ҡулға алды. Ул ғына ла түгел, хатта "егетлек" роленә лә инә башланы.

-Бындай һылыу ҡыҙҙың саҡырыуын кире ҡағыу - оло гонаһ... Һис һүҙһеҙ, киләсәкмен. Тик адресығыҙҙы онотҡанмын... - егет шаярыуға күсте.

Ҡыҙ адресын әйткәс, Сабит уның телефон номерын да һорашып, үҙенекенә яҙып алды. Сәғәт киске алтыға килергә икәнен әйтте лә, Гөлгөнә үҙенең ҡояшҡа йылтырап, мәк сәскәһе төҫөндәге өр-яңы машинаһына ултырып, етеҙ генә китеп барҙы. Мәк сәскәһе...

Тыуған көн мәжлесенә ун бишләп кеше килгәйне. Барыһы ла йәштәр. Сабит ишектән килеп ингәс тә барыһының иғтибары уға йүнәлде. "Са-бит Ха-ки-мо-вич, доб-ро по-жа-ло-вать!" тип хор менән сәләмләп ҡаршы алды студенттар алдан репетиция яһап, өйрәнеп ҡуйған буйынса. Унан гөж килеп ҡул саптылар, әйтерһең дә улар Гөлгөнәнең түгел, ә Сабиттың тыуған көнөнә йыйылған. Егеттәр барыһы ла тиерлек аҡ күлдәкле, галстуктан, ыҡсым ғына кейенешкән. Ҡыҙҙарҙың һәр береһен ниндәйҙер гүзәл сәскәгә тиңләрлек. Күҙбаштарын биҙәп, сәстәрен төрлөсә бөҙрәләтеп, өҫтәренә күҙҙең яуын алып торған күлдәктәр кейгән был ҡыҙҙар барыһы бергә йыйылғанда ифрат та матур бер сәскә түтәлен хәтерләтә. Һәр төрлө тәмле хушбуй еҫтәре сыҡҡан "түтәл"дең ҡап уртаһында - ҡыҙҙарҙы ҡамаштырырлыҡ "мәк сәскәһе"! Сабит үҙен ошондай гәжәп гөл баҡсаһы эсенә ингәндәй тойҙо. Мәжлескә килгән башҡа егеттәр кеүек үк, галстуклы, аҡ күлдәктә, ялтлап торған ҡара костюмдан булған Сабит тәүҙәрәк бер аҙ ҡаушай биреп тә ҡуйҙы, әммә үҙен тиҙ ҡулға алды. Йылмайған саҡта бер аҙ маңлайына күтәрелә биреп йәйелгән киң ҡара ҡаштары аҫтындағы һорғолт күҙҙәренән сабыйҙарса ихласлыҡ, эскерһеҙлек билдәләрен хаталанмай ғына уҡып булырҙай үҙенсәлекле йөҙ кешеләргә ифрат та тиҙ ышанып барыусан башҡорт кешеһенә генә хастыр. Йөҙөндә тап ана шундай йылмайыу балҡыған Сабит алып килгән гөлләмәне ҡыҙға тапшырҙы. Тағы ҡул сабыуҙар. Аш бүлмәһенән бер аҙ тулыраҡ кәүҙәле ҡырҡ биш-илле йәштәрҙәге ханым сығып, Сабитҡа ҡулын бирҙе.

- Ольга Николаевна, - тине ҡатын йылмайып. - Гуляның әсәһе.

-Сабит Хәкимович, - тине егет һәм еңелсә эйелеп, ҡатындың ҡул һыртына ирендәрен тейҙерҙе. - Можно просто Сабит...

Сабитҡа Гөлгөнә менән йәнәшәлә урын тәҡдим иттеләр. Ольга Николаевна ҡыҙының икенсе яғынан урын алды. Һәр төрлө тәм-том, затлы-затлы эсемлектәр менән һығылып торған өҫтәл тирәләй башҡалар ҙа теҙелеште. Ҡасандыр ярайһы ғына һылыу булған битен мөмкин тиклем йәш итеп күрһәтергә тырышып "штукатурлаған" Ольга Николаевна, әсә кеше булараҡ, иң тәүҙә һүҙ алды. Ошондай һәр мәжлестә гәҙәттә әйтелә торған һүҙҙәр менән ҡыҙын ҡотланы ла, уға ниндәйҙер ҡыйбатлы биҙәнеү әйбере бүләк итте. Тәүге фужерҙы Гөлгөнәнең һаулығына күтәргәндән һуң, Сабит Хәкимович аяғөҫтө тороп баҫты.

-Уважаемая Гульгина, - тип башланы ҡыҙҙың исемен русса дөрөҫ әйттемме икән, тип бер аҙ унайһыҙланғандай. Тамаҡ ҡырып алды ла, йәнәшәһендә ал сәскәләй балҡып ултырған Гөлгөнәнең күҙҙәренә ҡарап дауам итте. - Ысын йөрәктән һине тыуған көнөң менән ҡотлайым. Бар эштәреңдә, уҡыуыңда уңыштар теләйем...

Тағын да бер нисә теләк әйткәндән һуң, ҡаршы стенала элеүле торған гитараны алып биреүҙәрен һораны. Ҡулына алып, ҡылдарын бер-икене сиртеп, көйләп алғас, һүҙен дауам итте.

-Ҡәҙерле Гөлгөнә. Әле һинә бүләк итәсәк йыр әллә ҡасан уҡ сығарылған. Хәҙер уны йырлаусы ла юҡ, тиерлек. Башҡорт телендә яңғыраясаҡ был йырҙың һүҙҙәрен күптәр, бәлки, аңламаҫтыр ҙа. Әммә бала саҡта ишетеп, яратып, отоп алған шул йырҙың моңо һаман да минең күңелемдә. Бәлки, һинә лә оҡшар, тигән өмөттәмен һәм ошо йырымды һинә бүләк итәм. - Гөлгөнәнең матур күҙҙәренә ҡараны. Үҙендә һәр саҡ һушһыҙ иткән шул күҙҙәр менән һөйөнөү бәхете тағы ла ҡасан әләгер һинә, Сабит...




Студенттар араһында башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары ла байтаҡ ине, буғай. Гитараға ҡушылып, саф башҡорт телендә ифрат та моңло тауыш менән яңғыраған был йырға барыһы ла тынып ҡалды.

*Ниндәй матур оҙон*
*юлға сыҡтым,*
*Янар сәсәк ине юл башым.*
*Сәсәк тулған һинең йөрәгеңә,*
*Ниҙәр булыр,*
*йәшлек юлдашым?..*

Гитара ҡылдарын талғын ғына сирттереп, йыр көйөнөң аҙаҡҡы өлөшөн ҡабатлаған арала, ҡарашын бер-ике секундҡа Гөлгөнәнән алып, башҡаларҙың моңайып ҡалған йөҙҙәренә иғтибар итте. Тимәк, йыр күптәргә оҡшай, айырыуса, ҡаршыла рәттә ултырған ҡараҡас ҡыҙҙың күҙҙәре һағышлы тойолдо. Тик Ольга Николаевна ғына уның йырына битараф ҡарағандай. Йыр дауам итте.

*Ул сәсәкте өҙөп ҡарар өсөн*
*Эҙләп туғайҙарға барма һин.*
*Һин эҙләмә, уның үҙ йөрәге*
*Янар сәсәк булып ҡабынһын...*

Йырын тамамлап, Сабит ҡыҙға махсус сумаҙан эсенә һалынған ҡыйбатлы ноутбук бүләк иткәс, шау-гөр килеп ҡул сабыуҙарға ҡушылып, хатта кемдер әсе иттереп һыҙғырып та ебәрҙе.

-Рәхмәт, Сабит Хәкимович, - тине Гөлгөнә шат йылмайып. - Только жаль, что я башкирский язык не понимаю...

- Ә был йырҙы аңларға түгел, тойорға кәрәк, - тине ҡаршыла ултырған баяғы "ҡараҡас" сөмҡара күҙҙәренән ташып сыҡҡан йәштәрен ҡул яулығы менән ҡоротоп. - Йөрәктәргә үтеп инерҙәй йырығыҙ өсөн рәхмәт, Сабит Хәкимович...

* * *

Ошо кисәнән һуң Сабит менән Гөлгөнә йыш ҡына осраша ла башланы. Йә цирҡка, йә булмаһа берәй яңы фильмдың премьераһына барҙылар. Үҙе нисек кенә яратһа ла, Башҡорт драма театрына Гөлгөнәне алып бара алманы Сабит, сөнки тегеһе, башҡортса белмәү сәбәпле, унда йөрөүҙән ҡырҡа баш тартты. Ул ғына ла түгел, гәжәпкә, был сибәркәй башҡорт көйөн дә, хатта иң киткес матур ҡурай моңон да нишләптер үҙһенмәне... Үҙенең исемен дә "Гуля" тип атауҙы хуп күрҙе. Әммә ошо "мәк сәскәһе"нең матурлығынан тамам башы әйләнгән Сабит уның был "мәрйә"легенә бөтөнләйгә күҙ йомдо.

- Атайың башҡорт инеме? - тип һораны бер мәл Сабит ҡыҙҙан.

-Нишләп инеме? - тип һорауға һорау менән яуапланы ҡыҙ. - Хәҙер ҙә башҡорт ул.

Гөлгөнә атаһының әсәһе менән әллә ҡасан уҡ айырылышыуын әйтте. Әсәһе уны яңғыҙы тәрбиәләп үҫтергән. Үҙен урыҫ ҡыҙы тип һанап йөрөй ул. Тик фамилия һәм исеме генә "боҙа"... Үҙ милләтен нисек кенә һөймәһен, Сабиттың мөхәббәт менән томаланған күҙҙәре ошо "сәскәләрҙең дә сәскәһе"нән ары бер ни ҙә күрмәне. Яңғыҙ ҡалған саҡтарында һөйгәнен тағы-тағы ла күрергә заринтизар булып, йыш ҡына үҙ алдына һәр төрлө һағышлы йырҙар йырлар булып китте.

*... Болондарҙа йөрөгәнемдә*
*Гөлгә ғашиҡ булманым.*
*Сәскәләрҙең дә сәскәһен*
*Һиндер ул, тип уйланым...*

Уйҙар, уйҙар... Үҙенә йөҡларға бирмәгән иҡһеҙ-сикһеҙ уйҙарының ошо урынына килеп еткәс, ни өсөндөр, Сабит Хәкимович Гөлгөнәнең тыуған көн мәжлесендә күргән әлеге "ҡараҡас" ҡыҙҙы ҡабаттан иҫләне. Университет коридорҙарында һирәк-һаяҡ осраҡлы ғына күренеп ҡалған муйыл күҙле был ҡыҙҙың үҙенә һәр саҡ иғтибар иткән сырайын тағы күҙ алдына килтерҙе. Ир-егет затының йөрәк ҡылдарын тибрәтерҙәй, күңелен иретерҙәй, саф һөйөү хистәре тулы ҡараш... Әле генә аңлағандай булды был ҡыҙҙың үҙенә ҡарата булған һүҙһеҙ мөхәббәтен...

Әммә уйҙары уны яңынан әлеге "үҙенең тиңе булмаған мәк сәскәһе"нә алып килде. Уларҙың үҙ-ара булған мөнәсәбәтенә әсәһе ҡаршы түгелме икән, тигән уй ҙа борсой ине Сабитты. Сөнки бер бөртөк кенә ҡыҙының яҙмышына әсә кешенең һис тә битараф булмаҫын белә бит ул. Яңғыҙы өс бүлмәле ҙур ғына йортта йәшәй Ольга Николаевна. Ҡыҙына ла ике бүлмәле фатир, машина алып биреүгә өлгәшкән йүнсел был әсә, унайы тура килгән һайын Сабиттың эш хаҡы, матди хәле хаҡында уратып-уратып ҡыҙыҡһынғыланы. Бындай "ваҡ-төйәк"кә егет уғата ла әһәмиәт бирмәне. Студенттар дөйөм ятағының бер бүлмәһендә йәшәгән Сабит үҙенең тормошона һис тә зарланмай ине. Барына шөкөр итеп йәшәне ошоғаса. Утыҙ йәшкә етеп килеүенә ҡарамаҫтан, күңеле менән ябай ауыл малайынан әллә ни алыҫ китмәгәйне шул Сабит.

Көндәрҙән бер көндө егет ҡыҙға өйләнешергә тәҡдим яһаны. Ҡапылда уға бер ни ҙә яуап бирмәгән ҡыҙ, әлбиттә, өйөнә ҡайтыу менән был хаҡта әсәһенә әйтте. Ҡыҙына яһаласаҡ бындай тәҡдимде әллә ҡасан уҡ көткән Ольга Николаевна, ни өсөндөр, тағы үҙенсә һығымта яһап ҡуйҙы. Был хаҡта ҡыҙына ла әйтмәй ҡалманы.

- Дөйөм ятаҡта йәшәп ялҡҡан, күрәһең, был башҡорт...

-Ну и что, зато ул - кандидат наук! - тип үҙ яғын ҡайырҙы Гуля. - Икенсенән, беләһеңме, әсәй, мине күрһә, аҡылын юя бит ул. Фатирым булмаһа ла минә тәҡдим яһар ине ул, моғайын...

Үҙ баһаһын белә ине шул Гөлгөнә. Шуның өсөн дә әсәһенең "Сабит фатирыңа ҡыҙыға", тигән фекерен әллә ни оҡшатып етмәне.

-Эш хаҡы ла "ташҡа үлсәйем" генә бит...

-Уныһы ғына поправимо. Уға ҡалһа, курстағы барлыҡ ҡыҙҙар "үлеп" көнләшәсәктәр... Әсәй, минең уға кейәүгә сығыуымды үҙең дә теләйһең бит, так что... Ғөмүмән, мин иртәгә үк үземдең ризалығымды белгертәсәкмен.

-Әллә, үҙең ҡара...

Был диалог хаҡында, әлбиттә, Сабит Хәкимович белмәне, һәм бер ҡасан да белә алмаҫ ине. Әсә менән ҡыҙ араһындағы тәү ҡарауға бик тәбиғи булған бындай һөйләшеүҙең әллә ни яҡшы киләсәк тә вәғәҙә итмәгәнен белеү мөмкин түгел ине шул. Хатта һөйләшеүҙе ишетеп торған хәлдә лә эскерһеҙ һөйөү хистәре менән янған егет әһәмиәт бирмәҫ ине һымаҡ...

Никах туйы ҡуртымға алған кафела үтте. Башҡа кешеләрҙекенән бер нәмәһе менән дә айырылмаған гәҙәти туй. Ҡыҙҙың атаһы һәм уның туғандарының булмауын иҫәпкә алмағанда. Әсәһенең яҡындары, уның эш урынынан бернисә пар, Сабиттың ауылдан килгән ата-әсәһе, кардиохирургия бүлегендә бергә эшләгән коллегалары һәм иң күбеһе - Гөлгөнәнең курсташтары йыйылышҡас, кафеның ҙур залы ҡунаҡтар менән тулды ла ҡуйҙы.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**"Юлдаш" радиоһы тарафынан үҙешмәкәр башҡарыусылар араһында быйыл инде дүртенсе тапҡыр үткәрелгән "Юлдаш йыры - 2013" республика асыҡ конкурсы үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Халыҡ араһында радионың үҙе кеүек үк популяр булған был конкурс уны ойоштороусыларҙың һәм ҡатнашыусыларының хәтерендә ниндәй булып һаҡланды икән һуң, һүҙҙе уларҙың үҙҙәренә бирәбеҙ:**

# ХАЛЫҠ АРАҺЫНАН...

## бөртөкләп йыйылған таланттар бит улар



**Тәнзилә ҮЛМӘҪБАЕВА, "Юлдаш" радиоһының баш мөхәррире:** Республикала мәҙәниәткә, сәнғәткә иғтибар ҙур, шулай ҙа бөгөн һәләтле кешегә үҫеүе, үҙенә-үҙең юл ярыуы ауыр мәсьәлә, бигерәк тә үҙешмәкәрҙәр менән шөғөлләнеүсе ойошмалар юҡ. Улар үҙҙәренең ҡалаһында, ауылында үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап, район кимәленән сыҡмай йәшәй күберәк осраҡта. Телевидениеға, радио эфирҙарына сығыу, баш ҡаланың ҙур сәхнәһендә сығыш яһау өсөн мөмкинлектәре сикле, эшләп йөрөгән төп эш урындары бар, донъя мәшәҡәттәре лә баҫып китә торғандыр. Ә ижад кешеһе өсөн илһам алырға, үҫергә шарттар кәрәк. Ошоларҙы ла күҙ уңында тотоп башлап ебәргәйнек был бәйгене. Халыҡ араһында күп йөрөйбөҙ, һәләтле башҡарыусылар шул тиклем күп, ғөмүмән, һәләттәр ауылда тыуа, ауылда үҫә. Шундайҙарҙы сәхнәгә сығарып, күрһәткебеҙ килә ине. Беренсе йыл ауырыраҡ булды, ҡатнашырға баҙнат итеүселәр аҙыраҡ ине. Хәҙер конкурстың даирәһе киңәйә, бәйгеселәр һаны арта, иң мөһиме, конкурсҡа талантлы, йырҙарҙы урынына еткереп йырлай белеүселәр килә.

Конкурстың төп шарты буйынса башҡарыусы мотлаҡ халыҡ йырын йырларға тейеш. Сөнки халыҡ йырын йырлай белмәһә, йыр башҡарыусы үҙен йырсы итеп таный ҙа алмайҙыр, тип иҫәпләйем. Башҡарыусының тауышын, моңон баһалау өсөн уның башҡарыуында халыҡ йырын ишетеү ҙә етә. Бәйгеселәрҙең башҡарған икенсе йыры патриотик рухта булырға тейеш, сөнки Башҡортостанда йәшәйһең икән, уны яратырға, данларға ла бурыслыһың. Өсөнсө йыр иһә һәр кемдең үҙ ҡарамағына ҡуйыла. Шоуҙар башҡорт эстрадаһында былай ҙа етерлек, ә беҙ бындай кимәлдәге сараны шоу итеп үткәрә алмайбыҙ, уның мәғәнәһе, идеяһы булырға тейеш, шуға ла бәйгенең талаптары ла юғары. "Юлдаш йыры"нда еңеүселәрҙең исеме әле халыҡ араһында билдәлелек яуламаған, бәлки, иртәгә генә лә уларҙы белмәҫтәр. Әммә был еңеү уларҙың үҙе өсөн мөһим, ул артабанғы үҫеш өсөн этәргес булып тора. Йыл һайын бөтөн турҙарҙы үтә алған ун бишләгән кешенең дүрт-бишәүһе булһа ла яҙмышын сәхнә менән бәйләһә, үҙе ҙур ҡыуаныс. Конкурстан һуң махсус белем алырға ынтылалар, был да яҡшы. Хоҙай Тәғәлә йырлау һәләтен һәр кемгә бирмәй, улар был мондо халыҡҡа еткерергә тейеш.

**Мөхәмәт САДИҠОВ, Гран-при яулаусы, Миәкә районы:** "Юлдаш" радиоһы беҙҙең өсөн ысын мәғәнәһендә юлдаш, иртән "Юлдаш" менән уянабыҙ, кис "Юлдаш"ты тыңлап йоҡлап китәбеҙ. Халыҡ бит уны шул тиклем ярата, фәһемле тапшырыуҙары өсөн дә, йыр-моңдары өсөн дә. Йырлап ҡына юғары кәйефтә йәшәүҙән дә яҡшыраҡ нимә булыуы мөмкин һуң! "Юлдаш йыры" конкурсы иһә үҙешмәкәр түңәрәктәрҙә генә йырлап йөрөгән башҡарыусылар өсөн оло сәхнәгә сығыу юлы, хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашыра, көс бирә. Тағы ла йырҙар ижад итергә, бәйгеләргә ҡатнашырға теләк уяна. Бының өсөн конкурсты ойоштороусыларға ихлас рәхмәт.

Халҡыбыҙ иҫ киткес моңло бит ул беҙҙең, әсәйем дә йырлар ине, уның моңо күңелдә ҡала килгәндер инде, әрме хеҙмәтендә мин дә йырлай башланым. Тыуған яғымды, туғандарымды һағыныу тойғоһо көслө булғандыр инде. Хорҙа йырлай инем, бер ваҡыт хатта фестивалгә әҙерләндек, мине унда һайлап алып, солист итеп ҡуйҙылар. Тик етәксебеҙ ауырып китеү сәбәпле, унда бара алмағанлығыбыҙҙы бөгөн йылмайып хәтергә алам. Ҡайтҡас инде халыҡ йырҙарын башҡарыуға дәрт уянды, беренсе өйрәнгән "Азамат" йыры менән 1985 йылда Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге бәйгелә икенсе урынға ла лайыҡ булғайным. 30 йыл шофер булып эшләнем, гөрләп торған колхоздар тарҡалғас, ауылға клуб мөдире итеп ҡуйҙылар. Тормош иптәшем Фәнүзә менән өс ул үҫтерҙек, ололары эшләп йөрөй, килендәребеҙ менән балалар үҫтерәләр, иң кесеһе ил һағында. Ситтә йөрөгәндә күңелгә моң килә ул, бәлки, киләсәктә уның да сәхнәләргә сығып йырлау теләге барлыҡҡа килер.

Моңдо бикләп булмай бит ул, атайым мәрхүм, йыр ул күңел өсөн, тип әйтә торғайны. Ауылда йәшәгәс, хужалыҡ бар, мал бар, ҡайһы саҡта ваҡыт та етмәй китә, әммә йыр йәшәүгә дәрт өҫтәй. Шуға мин дә был бәйгелә ҡатнашып ҡарарға булдым. Дим буйы башҡорттары араһында ғына йырланған "Һунарсы йыры"н алып килдем. "Һунарым уңмаһа ла, башым иҫән", тип йырлай һунарсы. Тәбиғәт менән бер бөтөн булған зирәк һәм аҡыллы халҡыбыҙ барға шөкөр итеп йәшәү фәлсәфәһен гел өҫтөн ҡуйған бит, йырҙа ла шул сағыла. Һәр замандың үҙенең ҡыйынлығы була, әле бына Аллаға шөкөр, өҫтәлдәребеҙ тулы ризыҡ, эшләгән кешегә эше лә бар, донъялар ғына имен торһон. Шул саҡта тормошобоҙҙа йырға ла урын булыр.

**Динар ҒӘНИЕВ, 1-се урын яулаусы, Белорет ҡалаһы:** Ике яҡтан да бөтөн затырыуыбыҙ менән йырлағас, үҙемде иҫләгәндән алып йырлайым, тиһәм дә хаталанмаҫмын. Сығышым менән Бөрйән районынанмын, әлеге мәлдә Белорет ҡалаһында эшләйем. Ҡалала башҡорт милләте аҙ йәшәгәс, күптәр бында башҡорт донъяһы юҡ, тип тә уйлар, әммә был улай түгел. Ҡала мәҙәниәт һарайында төрлө түңәрәктәр эшләй, балалар ҙа шөғөлләнә. Шулай ҙа үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау сәнғәт кешеһен үҫтермәй. Телевизорҙан ғына концерттар ҡарау шулай уҡ зауыҡты байытмай. Шуға ла юлдаштарҙың был проектҡа тотоноуы ҙур әһәмиәткә эйә. Быға тиклем "Ирәндек моңдары", "Гәлсәр һандуғас" кеүек бәйгеләрҙә көс һанап ҡарағаным булһа ла, минең өсөн "Юлдаш йыры" оло мәктәп булды һәм был еңеүемде үҙем өсөн иң ҙурҙарының береһе, тип иҫәпләйем. Яңы дуҫтар табыу, яңы эшлекле бәйләнештәр булдырыу һине һөнәри яҡтан да камиллаштыра. Үҙем дә һирәкләп йырҙар яҙам, берәй гәзит йә журналда күңелгә ятышлы шиғыр күреп ҡалһам, шунда уҡ көйгә һала башлайым. Тамашасыға Лариса Абдуллина һүҙҙәренә яҙылған "Өҙмәгеҙ һары сәскәләр" йыры таныш булырға тейеш, уны Лилиә Биктимирова башҡара. Конкурсҡа иһә башҡорт халыҡ йыры "Азамат"ты һәм Илгиз Йомағужиндың Мәүлит Ямалетдинов һүҙҙәренә яҙылған "Мөғжизәле бала саҡ" йырын тәҡдим иттем.

**Денис ПОЛЯКОВ, "Өмөт" номинацияһы еңеүсеһе, Белорет районы**: Әрменән, бында башҡорттарҙан бер үҙем, тип ауылға хат яҙыусы урыҫ егете һымаҡ, мин дә башҡортса йырҙар йырлап, башҡортса һөйләшеп, үҙемде башҡорт итеп тойоп үҫтем. Белорет районы ерлеге өсөн был, ғөмүмән, ғәҙәти күренеш. Әсәйем тәрбиә биреүҙән тыш, башҡорт йыр-моңдарына ла һөйөү уята алған, тимәк. Атайым да башҡортса ғына йырлауыма өйрәнеп бөткән. Шулай ҙа быға тиклем башҡорт халыҡ йырҙарын өйрәнергә йөрьәт итә алғаным юҡ ине, "Юлдаш йыры"на тип махсус рәүештә "Ҡаһарман кантон"ды өйрәндем һәм бөтөнләй икенсе тойғолар кисерҙем. Һуҙып ҡына йырлай башлау менән һин бөтөнләй икенсе яҙмышты йәшәй башлаған кеүек тойола, геройың менән һин дә янаһың, борсолаһың, хәсрәтләнәһең. Хәҙер инде боронғо йырҙарға иғтибарымды арттырырмын, тип уйлайым.

"Асы" санаторийында мәҙәниәт хеҙмәткәре булып эшләп йөрөһәм дә, бәйге миңә мөғжизәле сәхнә донъяһын бөтөнләй икенсе яҡтан асырға, уға икенсе күҙлектән ҡарарға мөмкинлек бирҙе. Шуға ла киләһе йылда уҡырға инергә, яҙмышымды йыр менән бәйләргә теләйем.

**Ләйсән ЙӘНБИҘИНА, 3-сө урын яулаусы, Учалы районы:** "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәрҙәре ойошторған был бәйгене күптән күҙәтеп барам. Унда шундай ҙур кинәнес менән ҡатнаштым һәм хатта бер ниндәй урынға лайыҡ булмаһам да, һис тә үкенмәҫ инем. Ошондай ҙур мәктәп үткәндән һуң һәр беребеҙҙе еңеүсе тип әйтеп булыр ине.

Моң төбәгендә - Учалы ерендә тыуып үҫкәнгәме, халыҡ йырҙарын башҡарырға яратам. Ике олатайым - Ишбай Нурмөхәмәтов менән Сәфиулла Йәнбирҙин береһе скрипкала, икенсеһе мандолинала уйнап, йырларға ятаҡан, үҙ ваҡытына күрә, төбәктә танылыулы ғына йырсылар булғандар. Йырлау һәләте уларҙан да күскәндер. Үҙем ҙурайғас, Өфөгә килеп, ҡасандыр уларҙан яҙҙырып алынған яҙмаларҙы табып тыңларға насип булды, олатайҙарымдың эшен башҡарыу теләге көслө миндә. Һирәк башҡарылған йырҙарҙы сәхнәгә сығарыу, киләсәк быуынға өйрәтеп ҡалдырыу эше лә һалынған беҙҙең индәргә, ошо яуаплылыҡты ла тоям. Бәйгегә лә "Кинйәкәй" тигән йырҙы алып килдем, уны Спартак ағай Ильясов яҙып алып ҡалған булған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ике көнгә һуҙылған һәм үҙенсәлекле байрамға әүерелгән "Юлдаш йыры - 2013" конкурсының йомғаҡлау концерттары баш ҡаланың милли мәҙәни тормошона сағыу бер бит өҫтәне. Халыҡ араһынан һәләтле башҡарыусыларҙы бөртөкләп табып, оло сәхнәгә юл асҡан был конкурс иһә унда ҡатнашыусыларҙың тормошонда онотолмаҫлыҡ матур хәтирә булып ҡына ҡалмаҫ, ә киләсәккә хыялдар, маҡсаттар артынан юлланасаҡ һуҡмаҡтарының башы ла булһын, тип ышанайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ШӘРЕКТЕҢ НЕСКӘ ФӘЛСӘФӘҺЕ

**Кеше мөнәсәбәттәренең милли үҙенсәлекте иҫәпкә алып ҡоролорға тейешлеге көн кеүек асыҡ. Эйе, беҙ бер-беребеҙгә оҡшамағанбыҙ. Бик ҙур ауырлыҡ менән генә үҙгәрәбеҙ. Яңы шарттарға яраҡлаша алмай йонсойбоҙ.**

Беҙ, башҡорттар ҙа, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн күп көс һалып өйрәнгән милләт. Дошманға ҡаршы көрәш булһынмы, һауа шарттары менән айҡашыу, сәйәси алыштар булһынмы, юғалтыуһыҙ уңышҡа өлгәшә белмәйбеҙ.

Шәреҡ фәлсәфәһе бындай ҡылыҡты өнәмәй. Ҡытай мәҙәниәтендә, мәҫәлән, "Урал батыр" кеүек героик эпостар юҡ. Тиңе булмаған алышҡа инеүҙе ҡытайҙар хупламай. Сардарҙың етәкселеге күҙгә ташланмаған яуҙарҙа баһалана. Ысын стратег көсөн яу ҡырында түгел, һуғыш башланмаҫ борон ҡулланырға тейеш, тип иҫәпләнә. Алышта еңеүгә ҡарағанда, уны булдырмау ҙур баһалана.

Көнсығыш мәҙәниәтендә шундай риүәйәт бар: "Вәзирҙең алышта тиңе булмаған әтәсте ҡулына төшөргөһө килә. Шул ниәтен ул аҡһаҡалға әйтә.

- Ундай әтәсте табыу мөмкин түгел,- тип яуап бирә аҡһаҡал, - әммә теләгән бер әтәсте шул халәткә еткереп була.

Вәзир ризалаша һәм Аҡһаҡал һуғышсан әтәс тәрбиәләүгә тотона. Бер аҙҙан вәзир әтәс менән ҡыҙыҡһына: "Әтәс һуғышҡа әҙерме?"

- Юҡ әле, - тигән яуап ала ул, - әлегә әтәс шундай тәкәббер, ерле юҡтан ҡуҡырая ла китә...

Ун көндән һуң да Аҡһаҡал вәзиргә ошолай ти:

- Әтәс әлегә әҙер түгел. Һәр күләгә, һәр бер тауышҡа атлығып тора.

Йәнә ун көн үтә, әтәс һаман әҙер түгел. Вәзир ҙә түҙемһеҙләнә.

- Әтәстең ҡарашында нәфрәт бар,- тип аңлата Аҡһаҡал,- көсө лә ташып бара. Алышҡа сығырға иртәрәк...

Тиҙҙән вәзир Аҡһаҡалдан шундай яуап ишетә:

- Әтәс алышҡа әҙер. Ул инде икенсе бер әтәстең тауышын ишеткәндә ҡымшанмай ҙа. Ҡарашы һалҡын. Бер нәмәгә лә илтифат итмәй. Хәҙер уның менән алышҡа сығырға бер генә әтәстең дә ҡыйыулығы етмәйәсәк. Янына ла килмәй ҡасасаҡтар. Бынан кире һинең әтәсең еңелеү белмәйәсәк..."

Эйе, ысынлап та нескә шул шәреҡтең фәлсәфәһе...

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

## ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШТӘГЕ УҢЫШТАР...

## бәхет нигеҙе түгел

■ Ыңғай тойғолар кешенең сәләмәтлегенә яҡшы тәьҫир итә, иммунитетын нығыта. Ә балаларға көләү гармоник үҫеш өсөн дә кәрәк. Америка ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, көлгән саҡта баланың баш мейеһенең ижади һәләттәрҙе үҫтереү һәм үҙенсәлекле фекер йөрөтөүгә яуаплы өлкәһе әүҙемләшә. Оло-ларҙан айырмалы рәүештә, был процесс мейенең ике ярымшарында ла бара. Өлкән кешеләрҙә был әүҙемлек һул яҡ ярымшарҙа ғына күҙәтелә. Балаға дөрөҫ үҫеш өсөн ыңғай тойғолар бигерәк тә кәрәк. Шуға ла белгестәр балалар менән төрлө сараларға, циркка йөрөргә, күңелле йәнһүрәттәр ҡарарға тәҡдим итә.

■ Һалҡын тейеп ауырығанда сирҙе антибиотиктар менән дауаларға тырышыуҙың файҙаһы юҡ, тип белдерә Италия ғалимдары. Неаполдең Үҙәк клиник госпитале докторы Франческо де Блазио етәкселегендә үткәрелгән тикшеренеүҙәр барышында һалҡын тейҙереү һөҙөмтәһендә киҫкен йүтәл менән яфаланыусы 305 баланы дауалауҙы күҙәткәндәр. Беренсе төркөм тик антибиотиктар менән дауаланған, икенсеһендә балаларға комплексы дауа тәҡдим ителгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге балаларҙың йүтәле тиҙерәк үткән. Ғалимдар әйтеүенсә, антибиотиктар йүтәлде дауаламай, ул уны тыуҙырыусы инфекцияларҙы ғына юҡҡа сығара. Шуға ла бала йүткерә икән, уға антибиотиктар бирергә ярамай. Был саҡта организм, киреһенсә, хәлһеҙләнә, организмда бактериялар күбәйә һәм ауырыу тағы киҫкенләнә төшә.

■ Америка тикшеренеүселәре асыҡлауынса, эштәге уңыштар бәхетле тормоштоң нигеҙе булып тора алмай. Нотр-Дам университеты эргәһендәге Мендоза бизнес мәктәбе ғалимдары 70 йыл дауамында 717 һәләтле кешенең тормошон күҙәткән һәм уларҙы 5 төп өлкә: эш, ғаилә тормошо, ял, сәләмәтлек һәм "тормош килтергән шатлыҡ" буйынса ҡәнәғәтлек кимәлен тикшергән. Амбициялар кимәле уларҙан һорау алыуҙар ярҙамында асыҡланған. Университеттың профессоры Тимоти Джадж әйтеүенсә, амбициялы кешеләр матди планда уңышлыраҡ булған, әммә быға ҡарамайынса, улар үҙҙәрен "ялҡауҙар"ға ҡарағанда саҡ ҡына бәхетле тойған һәм уларҙың ғүмер оҙайлығы ла башҡаларҙыҡына ҡарағанда һис тә айырылмаған. Ә бына амбициялы булып та карьераһы килеп сыҡмағандар үҙҙәрен бөтөнләй бәхетле иҫәпләмәгән.

■ Лейпцигтағы (Германия) Мейе тикшеренеүҙәре институты ғалимдары белдереүенсә, физик күнекмәләрҙе музыка аҫтында башҡарыу ауырлыҡтарҙы еңелерәк ҡабул итергә ярҙам итә. Баҡтиһәң, кеше үҙенең яратҡан көйөн тыңлағанда аҙыраҡ арый икән. Белгестәр быны музыканың тынысландырыу һәләтенә әйә булыуы менән аңлата, бындай саҡта мускулдарҙа көсөргәнеш кәмей, организмды кислород менән тулыландырыу эшмәкәрлеге яҡшыра бара.

■ Лондонда (Бөйөк Британия) 2 мең кешенән һорауҙарға яуап алып, кеше үҙ ғүмерендә нисә тапҡыр ысынлап ғашиҡ булыуын асыҡлап ҡарағандар. Иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, был тойғо кешегә уртаса ике тапҡыр килә икән, етмәһә, бер тапҡыр уның был тойғоһо яуапһыҙ ҡала. Шулай уҡ асыҡланыуынса, уларҙың 73 проценты ғаиләлә мөхәббәтһеҙ йәшәй, улар башлыса үҙенең ысын мөхәббәтен юғалтҡандан һуң ғаилә ҡора. Ир-егеттәргә мөнәсәбәттәрҙең ныҡлығы, бер-берен тоғролоҡ һаҡлау мөһимерәк икәнлеге асыҡланған.

## ДОНЪЯ - ҠУЛАСА



**Эшһеҙлек, етешһеҙлек, һәр нәмәнең аҡсаға килеп төртөлөүе күптәрҙе һаулығын икенсе сиратҡа ҡалдырырға мәжбүр итә. Бөгөн хәленән килгәндәр, ныҡыштар ғына ваҡытында дауаланып, сәләмәтлеген нығытырға мөмкинлек таба. Кемдер тормош мәшәҡәттәренән бушай алмай, икенсе берәү дауахана тупһаларын тапап, эшенән яҙыуҙан ҡурҡа, ә өсөнсөһөнөң иһә врач яҙған дарыуҙарҙы һатып алырға кеҫәһе таҡыр. Шуға күрә урамдарҙа, интернет селтәрендә дауаланыу өсөн ярҙам һорап бирелгән иғландарҙың күплеге лә хәҙер берәүҙе лә артыҡ ғәжәпләндермәйҙер. Изге йәнле кешеләр ярҙамында сиренән ҡотолорға, йүнәлеүгә өмөт табырға тырыша ундайҙар.**

# УРТАҠ ҠАЙҒЫ...

## кешеләрҙе берләштерә икән

Дөрөҫ, бындай үтенестәргә лә төрлө ҡараш йәшәй. Бәлә үҙ башыңа төшкәндә генә уның әселеген нығыраҡ аңлайһың шул. Шуғамылыр инде, бындай иғландарға бөтөнләй иғтибар итмәүселәр ҙә, уларҙың авторҙарын алдыҡ юл менән аҡса эшләүселәр тип һанаусылар ҙа, һуңғы тиндәре менән бүлешергә әҙер тороусылар ҙа етерлек. Һуңғылар иҫәбенә үҙ башынан ҡайғы-хәсрәт үткәреүселәр, кеше ҡайғыһына битараф булмағандар инәлер, моғайын. - Нәҡ шундайҙар ғына "Ил төкөрһә, күл булыр", "Берҙәмлектә - көс" тигәнгә ышана һәм бәләгә ҡалыусыларға хәленән килгәнсә ярҙам күрһәтергә ашыға.

"Бәйләнештәр" селтәрендә: "Америкала дауалау өсөн Хәмиҙуллин Әмингә ярҙам кәрәк", - тигән видеоролик та йыш күҙгә ташлана ине. Фекер алышыуҙарҙа бик күп танышҭарҙың булыуы, ярҙам һораған ата-әсәгә ысын күңелдән уңыштар теләүе иғтибарҙы йәлеп итте. Ысынлап та ярҙам күрһәтеүселәр бармы икән, һәр кем үҙ донъяһына бикләнгән, кеше ҡайғыһы төштән һуң, тигән ҡараш ныҡыған заманда әскәрһеҙ, ярҙамсыл кешеләр ҡалғанмы, тигән уй күңелдә ҡыҙыҡһыныу уятты.

Лилиә һәм Илдар Хәмиҙуллиндарҙың улы Әмин тәүге бала булып донъяға килә. Үкенескә күрә, тормошта һөйөнөстәр һәм көйөнөстәр гел йәнәш йөрөй шул. Йәштәрҙең тәүге сабыйы һулышһыҙ донъяға килә. Врачтар, бәлки, бер-ике сәғәттән үҙе тын ала башлар, тип өмөтләндерә лә, сабый ун көн буйы реанимацияла кислород аҫтында ята. Ун көндән һуң сабыйҙы тыумыштан килгән пневмония һәм гематоманан дауалау өсөн патология бүлегенә күсерәләр. Бәлә яңғыҙ йөрөмәй, тигәндәре лә дөрөҫ булып сыға. Медицина тикшереүҙәре бала мейеһендәге ике күҙәнәктең үлеүен асыҡлай. Врачтар хәлдәренән килгәнсә ярҙам күрһәтеп, баланы һәм әсәне өйҙәренә ҡайтара.

Бер ай ял иткәндән һуң дауахана юлын тапау яңынан башлана. Өс айлыҡ булғансы бала тыныс йоҡлай, төшөндә йылмайып та ҡуя, әсенә һалһаң, башын ҡалҡытып ҡарай, әммә баш мейеһендәге күҙәнәктәр генә үлеүҙән туҡтамай. Әминдең хәле күҙгә күренеп насара. 5 ай тулғас, Лилиә сабыйы менән тағы дауаханаға ята. Врачтар бик күп тикшереүҙәр үткәргәндән һуң шаңҡытҡыс ҡарар сығара: күҙәнәктәр үлеүен дауам итә, быны хатта операция ярҙамында ла туҡтатып булмай! Бала ғүмерлеккә түшәккә ятасаҡ!

- Өҫтөмә ҡайнар һыу ҡойҙолармы ни, хатта тәндәрем ойоп китте. Ҡурҡыныс ҡарарҙы ҡолаҡтарым ап-асыҡ ишетһә лә, күңелемдең бер ҙә генә быға ышанғыһы килмәне. Ҡөрьәндәге: "Сирен дә бирермен, шифаһын да бирермен, әҙләгеҙ...", - тигән һүҙҙәрҙе иҫемә төшерөп, үҙемде йыуатырға, тынысландырырға тырыштым. Эргәмдә көслө рухлы, иманлы һөйгәнем Илдар булыуына Аллаһы Тәғәләгә мең шөкөрҙәмен. Врачтарҙың аяуһыҙ һүҙҙәрен еткергәс тә, ирем ебеп төшмәне, уның: "Матурым, беҙ быны оло ҡайғы итеп түгел, ә һынау итеп ҡабул итәйек һәм уны үтеү өсөн үҙебеҙҙе лайыҡлы тотайыҡ",- тигән һүҙҙәре минә көс бирҙе,- тип хәтерләй күңелһеҙ ваҡиғаларҙы Лилиә.

Больницанан сыҡҡас, йәш атай-әсәйҙең һөйләп тә, яҙып та аңлата алмаҫлыҡ ауыр, бер генә секундҡа ла үҙен онотторман ҡурҡыныс сир менән көрәше башлана. Ҡайҙа ниндәй яҡшы врач, халыҡ табибы бар - шунда сабалар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Башҡортостанды арҡырыһына-буйына тигәндәй йөрөп сыҡһалар ҙа, береһе лә өмөтләнерҙәй һүҙ әйтмәй. Баланың тартышыуы көсәйә, көнө-төнө илай, тәүлегенә ике-өс сәғәт кенә йоҡлай. Ваҡыт үтһә лә, сабый физик яҡтан да үҫешмәй, үҙгәрешһеҙ ҡала. Әммә Лилиә менән Илдар Хоҙай Тәғәләнең ҡөҙрәтенә ышанып, яҡшыға өмөт итеүҙән туҡтамай. "Был баланы бер нисек тә аяҡҡа баҫтыра алмаҫһығыҙ, ул хәҙер йәшәлсә хәлендә. Унан төңөлөгөҙ, икенсе бала табырһығыҙ, үҙегеҙҙе уйлағыҙ", - тиһәләр ҙә, йәштәр ғәзиз балаларынан баш тартмай.

- Үҙе бала ҡайғыһы кисермәгән туң йөрәкле кеше генә баланан баш тартырға тәҡдим итә алалыр. Үҙебеҙҙә дауалауҙан баш тартҡастар, интернет аша белешеп, күп ерҙәргә шылтыраттыҡ. Шулай бер көн әхирәтем Америка ғалимы Гленн Домандың "Что делать если у вашего ребенка повреждение головного мозга" тигән китабын табып, ҡулыма тотторҙо. Мөғжизәләй күреп, китапты бер тынала уҡып сыҡтым һәм, ысынлап та, өмөтөм артты. Был методиканы ныҡлап өйрәнеп, сир менән көрәшергә тотондом. Тырышлыҡ бушҡа китмәне, бәләкәй генә үҙгәрештәр һиҙелә башланы. Тик барыһы ла китапта яҙылғанса еңел генә түгеллеге, ошо методика менән эшләүсе табиптар ярҙамы кәрәклеге асыҡланды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай оҫталар республикала түгел, бөтә Рәсәй буйынса ла табылманы. Эҙләнә торғас, бындай балаларҙы сит илдә генә дауалауҙарын белдек. Әммә Америкала дауаланыу уйы башҡа ла инеп сыҡмай, сөнки әллә нисә йыл аҡса йыйһаҡ та, беҙҙең хәлдән килерлек түгел. Шулай ҙа төшөнкөлөккә бирелмәнек. Интернет селтәре аша Америка табиптарының Украинаға килеп дауалауҙарын белеп ҡалдыҡ. Оҙаҡ уйлап тормай, фатир алырға тигән аҡсабыҙҙы бер йәлләүһеҙ тотоноп, юлға сыҡтыҡ.

Унда төрлө ерҙән һауыҡырға ышанып килгән кешеләрҙең күплеген күреү ышанысыбыҙҙы тағы ла арттырып ебәргәндәй булды. 20 көн буйы Севастополь ҡалаһы янындағы диңгеҙ буйында лагерҙа яттыҡ. Ҡайтҡас та дауалауҙы дауам иттек. Тик ошо методика буйынса дауалаған табиптарға йыш күренеп торорға кәрәк ине, ә аҡса мәсьәләһе дауалауҙы тотҡарлай килде.

Уртаҡ ҡайғы кешене берләштерә, тиҙәр. Лилиә менән Илдар ҙа ошондай уҡ бәләгә тарыған кешеләр аша Америкала дауалау үҙәге барлығын белешә. Ауыр саҡта һәр ваҡытта ла эргәлә булған дуҫтары кешеләрҙән ярҙам һорарға кәңәш бирә. Йәш ата-әсә сараһыҙҙың көнөнән ошо тәҡдим менән ризалаша һәм интернет селтәре, радио, телевидение аша мәрхәмәтле кешеләргә үтенес менән мөрәжәғәт итә. Эргә-тирәһендә изге кешеләрҙең күплегенә һис шикләнмәгән ғаиләне сит ҡайғыны үҙҙәренекеләй күреп ярҙам итергә әҙер тороусыларҙың күплеге тамам хайран ҡалдыра. Бөтә Башҡортостан тиерлек ярҙам ҡулы һуҙа уларға. БСТ каналы, "Йәшлек", "Аҙна" гәзиттәре, "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәрҙәренең тырышлығына, кешелеклегенә әле лә һөйөнөп бөтә алмай Хәмиҙуллиндар. Әлбиттә, туғандар, дуҫтар, коллегалар ярҙам күрһәтеүҙә иң тәүгеләр була. Әминдеке кеүек диагноз менән түшәккә ятыусы балаларының бер айлыҡ инвалидлыҡ пособиеһын күсереүсе ата-әсәләр ҙә була. "Беҙҙең хәлдән килмәне, исмаһам, һеҙ сабыйығыҙҙы аяҡҡа баҫтырығыҙ", ти улар. Бер сиркәү 300 мең аҡса күсерһә, "Жизнь детям" фонды 230 мең аҡсаһы менән булешә. Республикала үҙенең хәйриә ярҙамы менән танылыу алған Хәмзә хажи ҙа был эштән ситтә ҡалмай һәм 40 мең һум аҡса бирә. Аноним рәүештә 100-әр, 50-шәр мең аҡса биреүселәр ҙә күп була. Ғөмүмән, Лилиә менән Илдарҙың ҡайғыһын да үҙенекеләй күреп, ярҙам итергә атлығып тороусылар күп булып сыға. Америкаға барып төшкәс тә уларға Башҡортостанда тыуып үҫеп, бөгөнгө ваҡытта Америкала үҙенең бизнесын булдырып, уңышлы ғына эшләп йөрөгән Илсур исемле башҡорт егете ихлас ярҙам күрһәтә. Уларҙы яҡын дуҫтарылай күреп ҡаршы ала, һәр ерҙә лә оҙатып йөрөй, үҙенең дуҫтары менән таныштыра. Ер аяғы ер башы ерҙә, ете ят кеше лә бер туғанындай күренә икән шул. Бөгөнгө көндә Илсур ҙа Хәмиҙуллиндар өсөн иң яҡын туғанға әйләнгән. Ғөмүмән, үҙҙәрен бәлә менән яңғыҙ ҡалдырмаған кешеләрҙең барыһына ла рәхмәтле был ғаилә. Күптән дин юлына баҫҡан йәштәр намаҙ ҡылған һайын улар өсөн изге доғалар ҡыла, уларға иҫәнлек-һаулыҡ, тормош именлеге, ҡылған изгелектәренен үҙҙәренә артығы менән әйләнеп ҡайтыуын теләй.

Ысынлап та, ҡумаклап тырышыу бушҡа булмай. Хоҙай Тәғәлә насип итҡәс, Әминдең хәле күпкә яҡшыра. Ул төндәрен тыныс йоҡлай, күҙе күрә башлай, тартышыуҙары кәмей, көнө буйы илауҙан туҡтай. Бөгөн Әмин имгәклөргә өйрәнә. Дауалау программаһы буйынса курсты үтеп бөткәс, улар мәрхәмәтле кешеләрҙең ярҙамы менән тағы ла Америкаға юлланасаҡ. Баланы ныҡлап аяҡҡа баҫтырыу өсөн сит илдәге дауалау курстарын һәр ярты йыл һайын ҡабатлап тороу мотлаҡ. Ошо урында илебеҙҙәге бәләкәй эш хаҡы, медицинабыҙҙың сит илдә кеүек көслө булмауы үкенесле уйҙар ҙа тыуҙыра, сөнки ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҙур суммала аҡса табыу мәсьәләһе лә еңелдән түгел. "Ике ҡулын һоноп ярҙам һораусыларҙың береһен дә буш ҡалдырмам",- ти Хоҙай Тәғәлә. Шулай булғас, Илдар менән Лилиәнең дә үҙ балаларын аяҡҡа баҫтырыу ниәте, һис шикһеҙ, тормошҡа ашыр, Хоҙай үҙ мәрхәмәтенән ташламаҫ, юлдарында изге кешеләр осрап торор тип ышанайыҡ һәм теләйек.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

ХӘТЕРКИТАП

# ТАҒЫ БЕР АҪЫЛ ЗАТТЫҢ...

## золом ҡорбаны булғаны

**"Киске Өфө" гәзитендә (2013 йыл, 12-се һан) 30-сы йылдарҙа Башҡортостандың мәғариф буйынса халыҡ комиссары булып эшләгән, 1937-1938 йылғы сәйәси золом ҡорбандары булған башҡорт милләтле биш нарком тураһындағы мәҡәләне уҡығас, тағы бер шәхес иҫкә төштө һәм "Был исемлеккә алтынсы башҡортто ла өҫтәргә була" тип уйлап ҡуйҙым.**



Ғисмәтуллин Абдулла Төхфәтулла улы 1883 йылда Ҡаҙағстанда, хәҙерге Ҡостанай ҡалаһында тыуған. Атаһы - башҡорт, әсәһе ҡырғыҙ милләтенән. Атаһы яҡтан олатаһы, ата-әсәһе мөғәллим булған. Абдулла биш йыллыҡ мосолман мәктәбен, ике йыллыҡ дәүләт мәктәбен, дүрт йыллыҡ юридик факультет тамамлаған. Башҡорт, татар, урыҫ, ғәрәп, төрөк, һарт телдәрен яҡшы белгән. Абдулла Ғисмәтуллиндың төрки телдәр буйынса танылған ғалим, профессор булыуы тураһында Муса Йәруллах Бигиевтың "Ислам милләттәренә - Исламиәт әлифбаһы" исемле китабында (Берлин, 1923) иҫкә алына. Шулай уҡ Ғабдулла Туҡай хәтирәләрендә дуҫы Абдулла Төхфәтулла улы тураһында хәбәрҙәр бар. Әлеге ваҡытта Татар энциклопедияһында һәм Башҡорт Википедияһында ғалим, дәүләт хеҙмәткәре Ғисмәтуллинға арналған ҡыҫҡа ғына мәҡәлә урын алған.

1917 йылдан һуң Абдулла Төхфәтулла улының эшмәкәрлеге большевиктарҙың идара ойошмалары менән бәйле икәне, 1920 йылдан РКП(б) ағзаһы булыуы билдәле. Совет Рәсәйе хөкүмәтенең Халыҡ мәғарифы комиссариатында музыка бүлеге мөдире, Төркөстан-Башҡорт дивизияһында журналист, Шәреҡ институты ректоры, Милләт эштәре буйынса Халыҡ комиссариатының ғилми хеҙмәткәре булған. Һуңғы эш урынында Иосиф Сталин етәкселегендә эшләргә тура килә. Шул осорҙа комиссариат янында төрки телле халыҡтарҙы латин алфавитына күсереү буйынса махсус комиссия эшләгән. Комиссия ағзалары тәүге ултырышта латин алфавитына күсеүҙе кисектереп торорға тәҡдим итә, быны "...бер яҙманан икенсе яҙмаға күсеү бик күп халыҡ ҡатламын яңы яҙмала наҙан итәсәк..." тигән фекер менән дәлилләйҙәр.

1924 йылда Ғисмәтуллин Башҡорт АССР-ы Госпланы рәйесе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнә һәм Өфөгә күсерелә. 1926-1928 йылдарҙа Башҡортостан Халыҡ мәғарифы буйынса халыҡ комиссары булып эшләй. 1929 йылдың йәйендә Башҡорт АССР-ы Үҙәк статистика идаралығын етәкләй. Башҡортостанда 1937 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙы ойоштора. Билдәле булыуынса, 1937 йылғы халыҡ иҫәбен алыусы хеҙмәткәрҙәр бөтәһе лә тиерлек репрессияға дусар ителгән. Әммә ләкин Ғисмәтуллин "статистиктар эше" буйынса исемлектә юҡ, сөнки ул "эш" ҡуҙғатылғансы уҡ ҡулға алынған. Башҡортостандың сәйәси ҡорбандары исемлегендә Башпищепромдың бүлек мөдире вазифаһын биләүе хаҡында теркәлгән, әммә архивтағы шәхси мәғлүмәттәрҙә был турала хәбәр юҡ.

1937 йылдың 27 февралендә ВКП(б) ҮК Пленумы репрессияларҙы киң күләмдә башлап ебәрергә фатиха биреүсе ҡарар ҡабул итә, һәм Ғисмәтуллин беренселәрҙән булып 28 февраль-1 март төнөндә ҡулға алына. Бындай "етеҙлеккә" Абдулла Төхфәтулла улының Иосиф Сталин менән бер ойошмала эшләүе сәбәпсе булғандыр. Үрҙә иҫкә алынған Милләт эштәре буйынса Халыҡ комиссариатының латин алфавитына күсеү буйынса махсус комиссия ағзалары бөтәһе лә сәйәси репрессия ҡорбандарына әйләнә.

Абдулла Төхфәтулла улы Ғисмәтуллин 1938 йылдың 10 июнендә 58-се статья буйынса иң юғары язаға хөкөм ителгән һәм шул уҡ көндә атылған. Ҡатыны Зәйнәб биш йылға хөкөм ителә. Ҡатынының, ҡыҙы Нәиләнең, улы Надирҙың артабанғы яҙмышы тураһында мәғлүмәт әлегә билдәле түгел.

Тарихсы Юрий Ергиндың ғилми эштәрендә Ғисмәтуллиндың башҡорт мәктәптәре өсөн уҡыу әсбаптәре авторы булыуы тураһында мәғлүмәт бар. Әммә ғалимдың 1917 йылға тиклем нәшер ителгән ғилми хеҙмәттәрен дә, совет осоронда яҙған эштәрен дә осратманым, шул уҡ ваҡытта махсус эҙләмәнем дә. Абдулла Төхфәтулла улы хаҡында мәғлүмәт Башҡортостан статистика хеҙмәте тарихын өйрәнгәндә йыйылғайны. Күп кенә мәғлүмәтте тикшереп, асыклыҡ индерәһе бар.

1957 йылда СССР Юғары судының хәрби коллегияһы тарафынан Абдулла Төхфәтулла улы Ғисмәтуллин тураһындағы 1938 йылғы нахаҡ ҡарар ғәмәлдән сығарылған, әммә кешенең яҙмышын кире ҡайтарып булмай шул. Тик тағы бер шәхесебеҙ хаҡында онотмай, уның тураһында күләмле ғилми эш яҙыусы рухлы йәш ғалимыбыҙ булһын ине. Үҙем белгән барлыҡ мәғлүмәтте ышаныслы ҡулдарға тапшырыу килә.

**Рөстәм ҒАТАУЛЛИН,**
**Башҡортостанстат етәксеһе урынбаҫары.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ



## Тимер ҡоршау

*Дошмандарығыҙ бер ваҡытта ла һеҙҙең нимә уйлағанлығығыҙҙы белергә тейеш түгел. Улар һеҙгә ҡамасаулау мөмкин булмаған ваҡытҡа тиклем мәғлүмәтһеҙ булырға тейеш.*

"Һыуҙан ҡоро сығыусы" немец сығышлы рус дипломаты Андрей Остерман биш императорға хеҙмәт итә, дөрөҫөрәге, үҙ заманының барлыҡ билдәле сәйәсмәне менән эшләй. Бер кем дә, бер ваҡытта ла уның - бер әңгәмә барышында ғына һәр кемдең ҡарашын тамырынан үҙгәртергә һәләтле был кешенең уйында нимә барлығын белмәй. Анна Иоановнаның кабинет-министры Артемий Волынский уны "шайтан каналдары менән эшләүсе һәм бер ваҡытта ла тура һөйләмәүсе, әуратып-суратыусы" тип иҫәпләй. Вице-канцлер һәм оҙаҡ йылдар сит ил менән бәйләнештәр өсөн яуаплы булған Остерман Рәсәй эсендәге генә түгел, сит илдәрҙәге сәйәси ағымдар менән дә оҫта идара иткән. Хатта Пруссия короле Фридрих Икенсе уға шундай характеристика биргән: "Һәләтле юлбашсы, иң ярһыу түңкәрелештәр дәүерендә ул империя менән идара итте, хәл-торошҡа ҡарап һаҡ һәм ҡыйыу булды, Рәсәйҙе Верней кеше тәнен белгән кеүек белә". Кешеләрҙе үҙ яғына ауҙарыу өсөн ялғанға мөрәжәғәт итергә лә тартынмаған Остерман - ҡомһоҙ булмаған һәм үҙен ҡаҙнанан урлашыу менән бысратмаған һирәк сәйәсмән. Уның артабан нимә эшләрен берәү ҙә белмәй, әммә ул һирәк кешеләрҙә була торған һиҙемләүгә эйә була һәм эс-серҙәрен асмай ғына үҙенә кәрәкле сәйәси фигураға ставка ҡуя. Шуға күрә ваҡытында йәберләнгән Меньшиков яҡлы булып та, йә йәберләнгән "хакимдар" яҡлы булып та, йә йәберләнгән Бирон яҡлы булып та, кәрәк ваҡытта уларға хыянат итеп, һәр ваҡыт һыуҙан ҡоро сыға.

Иң яҡшы йәндәр - һығылмалы һәм һәләтле кешеләр. Асыҡтан-асыҡ ҡорал менән яңарға һәм ҡурҡытырға һәр кем һәләтле түгел. Ҡағиҙә булараҡ, үҙенең көсһөҙлөгөн йәшерергә тырышыусылар һәм үҙҙәренең бөйөклөгөн күрһәтергә теләүселәр генә шундай аҙымға бара. Һиҙгер сәйәсмән бер ваҡытта ла "кирегә боролоу нөктәһен" үтмәй тороп, үҙенең пландарын асмаясаҡ. Тәжрибә шуны күрһәтә, был осраҡта енелеүсе яҡ ашыҡмай ғына хәл-торошто тәҙәтеп, аҡланып, "стрелочниктар" эҙләй башлаясаҡ. Был ваҡытта һеҙ тыныс ҡына үҙегеҙҙең хәйләгеҙҙең емештәрен татыясаҡһығыҙ. Спартаның сәйәси эшмәкәре Лисандр әйтеүенсә, "ҡайҙа юлбарыҫ тиреһе ҡыҫҡа, ул урынға төлкө тиреһен тегергә кәрәк". Уны Макиавелли ҙа хуплаған: "Үҙең нимә һөйләгәндә йәшереп, башҡалар нимә һөйләгәнен аңла, шул саҡта ысын кенәз булырһың".

**Сергей СУВОРОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун алтынсы көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Мини ял**

Әгәр һеҙ тулы камиллыҡҡа өлгәшергә теләйһегеҙ икән, организмығыҙҙағы теләһә ниндәй көсөргәнештән арынырға тейешһегеҙ. Саманан артыҡ көсөргәнеш һөҙөмтәлелекте кәметә һәм булмышығыҙҙа йөҡлап яткан көслө ҡеүәтте файҙаланырға мөмкинлек бирмәй. Стресты кәметеү буйынса күнекмәләр эшләп, тиҙҙән үҙегеҙҙе күпкә тынысыраҡ, көслөрәк һәм бәхетлерәк тоя башларһығыҙ.

**Күнекмәләр.** Тыныс урынға уңайлы итеп ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, тәрән итеп тын алығыҙ. Тын алғанда эсегеҙҙе ҙур һауа шары итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Тынығыҙҙы тотоп торогоҙ һәм тулыһынса сығарығыҙ. Барлыҡ хәстәрҙәрегеҙ һәм көсөргәнешегеҙ торбанан төтөн сыҡҡан кеүек һеҙҙән сығып китеүен күҙҙән үткәрегеҙ. Тәрән итеп тын алыуҙы ике минут дауамында эшләгеҙ, үҙегеҙҙе көсөргәнештән нығыраҡ арынған итеп тойоғоҙ. Иғтибарығыҙҙы бары тик тын алыуға ғына туплағыҙ.

Хәҙер аяҡ табандарынан алып, тәнегеҙ ауырая барғанын күҙаллағыҙ. Артабан инде нисек итеп аяҡтарығыҙҙың көсөргәнештән арынғанын ҡарағыҙ. Һәр мускулығыҙҙың йомшарғанын, барлыҡ көсөргәнештең тәнегеҙҙе ташлап киткәнен күҙаллағыҙ. Уйығыҙҙа ғына ҡулдарығыҙ, муйынығыҙ, башығыҙ аша үтеп, өҫкә күтәрелегеҙ. Хәҙер инде үҙегеҙҙе тулыһынса көсөргәнештән арынған итеп тойоғоҙ, отпускылаларын икән, тип хис итегеҙ. Күпме ваҡытығыҙ бар, барыһы ла һеҙҙең ҡармаҡта. Ҡулығыҙҙа сәғәт юҡ, бер ниндәй ҙә осрашыу билдәләнмәгән. Һеҙ урманда ялан аяҡ күпереп үлән үҫкән яланда йөрөйһөгөҙ. Ҡоштарҙың һайрауын, яҡында ғына шишмә сылтырап ағыуын тыңлағыҙ. Үләндәрҙең һәм сәскәләрҙең хуш еҫен һулағыҙ. Атлаған ваҡытта еүеш ерҙең аяҡ табандарын иркәләгәнен, ҡояш нурҙарының, ағас япраҡтары аша үтеп, нисек итеп ерҙе йылытҡанын тойоғоҙ. Һеҙ иҫ киткес йәшел урман аша күлгә табан бараһығыҙ. Күл тыныс, өҫтө ҡатып ҡалған быяла төҫлө тып-тын. Аңығыҙ ҙа ошо күл кеүек тыныс. Һеҙ тәбиғәт менән күҙгә-күҙ ҡалып, тәрән тыныслыҡ кисерәһегеҙ. Был һеҙҙең мини-ялығыҙ. Ә хәҙер күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм яңы көс менән эшкә тотоноғоҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Эс өсөн күнегеүҙәр**

Эс өсөн күнегеүҙәр мускулдарҙы нығыта, ә улар яҡшы сәләмәтлекте һаҡлау өсөн кәрәк. Беҙ өлкәнәйгән һайын, эс мускулдарын тонуста тотоуы ауырлаша бара. Эсегеҙгә май үрмәһен өсөн аэробика менән шөғөлләнергә, мускулдарҙы күнектерергә, сүгәләп ултырыуҙарҙы даими башҡарырға, май аҙ булған аҙыҡ-түлектән торған диета һаҡларға кәрәк. Һәр көн 20 тапҡыр сүгәләп ултырыу күнегеүен эшләгеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Кешеләрҙе яратырға өйрәнегеҙ**

Ашнаҡсы булырға теләгәндә, аш бүлмәһенә инеп, үҙегеҙҙе ашнаҡсы тип иғлан итеү генә етмәй. Уның өсөн уҡырға һәм өйрәнергә кәрәк. Уҡытыусы булырға теләгәндә, класҡа инеп, уҡыта башланың тигән һүҙ түгел, тәүҙә үҙеңә белем алырға кәрәк. Аналогия буйынса, бер кем дә мөхәббәткә әҙер булып тыумай, тип раҫларға мөмкин. Тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәттәрҙән күпте алып, кешеләрҙең барыһын да яратам тиһәгеҙ, үҙеңде күнектерергә кәрәк. Ҡағыҙға үҙегеҙ яратырға теләгән барлыҡ ир-аттарҙың йәки ҡатын-ҡыҙҙарҙың исемлеген яҙығыҙ. Хәҙер уларҙың һәр ҡайһыһына "мөхәббәт хаты" яҙығыҙ. Һеҙ уларҙы бер ваҡытта ла адресатҡа ебәрмәйәсәкһегеҙ, шуға күрә хис-тойғоларығыҙҙы тыйып тормаһағыҙ ҙа була. Улар тураһында нимә уйлайһығыҙ, уларға ниндәй мөнәсәбәттәһегеҙ, улар янығыҙҙа булғанда ниҙәр кисерәһегеҙ - барыһын да асыҡтан-асыҡ яҙығыҙ. Романтик булығыҙ, фантазияғыҙҙы эшкә егегеҙ. Һүҙҙәрегеҙ алйотораҡ яңғыраһа ла, улар ихлас күңелдән буласаҡ. Ошо "мөхәббәт хаты"н яҙыуҙың файҙаһы бик ҙур, ул һеҙҙә яратыу һәләтен асасаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 28 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" с Юлией Меньшовой (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
